*Аҡылһыҙлыҡ – ул ҡырҡҡа бөгөлөп кемгәлер ярарға тырышыу, кешене рәнйетеү һәм шуны ғәфү итерҙәр тип өмөтләнеү, кеше ғаиләһенә ҡыҫылыу, кешенең артында уның етешһеҙлектәре хаҡында һөйләү.*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

17-23 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2007 ЙЫЛ

№7 (217)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,** Азатлығы бөтә, халҡы бөтә... — 2



**“Ҡуян ат, һырлы сана”,** йәки Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама... — 6



**Йән тарта,** йән тартмаһа,ҡан тарта — 8-9



**Уйҙары...** донья хаҡында — 16



**ТВ ПРОГРАММАҺЫ** — 14-15


АФАРИН!



# Бай төбәктә йәшәгәндәр

## талантҡа ла бай

"Башҡорт халҡы фәнгә һәм һөнәргә бик һәләтле", тип яҙып ҡалдырған Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. Башҡорттарҙың боронғо көнкүреш әйберҙәрен күргән саҡта был уй нығына төшә. Әлбиттә, ундай әйберҙәрҙе бөгөнгө көндә тик музейҙарҙа ғына осратырға була. Иғтибар иткәнегеҙ бармы: иҫ киткес зауыҡ менән шундай матур һәм уңайлы итеп эшләнгән улар - күҙҙәр ҡамаша! Беҙ бөгөн ҡарап һоҡланған әйберҙәрҙе ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренең көндәлек тормошонда ҡулланған. Тимәк, улар тормоштоң ҡәҙерен белгән, матурлыҡҡа солғанып йәшәгән. Совет осоронда башҡа төрлө мәҙәни ҡиммәттәр кеүек көсләп тағыла башлағас, башҡа төр һөнәрҙәр менән бер рәттән, мәҫәлән, ағастан һырлап эшләү кеүек һөнәр ҙә йоҡоға талғандыр. Бында,әлбиттә, совет властын ғына ғәйепләп тә булмайҙыр. Тормош бит. Яңырыу, яңы ҡиммәттәр барлыҡҡа килеү тәбиғи күренеш. Әммә ваҡыт тигән нәмә бик ҡатмарлы төшөнсә - ул бер яҡтан, ойотһа, икенсе яҡтан, кире уята ла ала. Шулай булмаһа, ауыҙ-тел ижадының, боронғо йолаларҙың, элекке кәсептәрҙең яңынан популярлашыуын нисек аңлатмаҡ кәрәк? Быуындар күсәгилешлеге генә үҙгәрмәһен, асыл юғалтмаһын - халыҡ хәтере ҡасан да булһа барыбер уяна.

(Аҙағы 5-се биттә).

## ИҒТИБАР!

Икенсе ярты йыллыҡ өсөн “Киске Өфө”гә яҙыла башларға мөмкин: әлегә хаҡы элеккесә – 237 һум 54 тин. 17 мартҡа тиклем яҙылып ҡалһағыҙ, гәзитте апрелдән алдыра башлаясаҡһығыҙ. Индексыбыҙ – 50665.

АТАЙ ҺӘМ УЛ

# Ни сәсһәң...

**Ниһайәт, күптән көткән беренсе балам - улым тыуҙы. Ҡыҙғаныска күрә, ул донъяға килгәндә мин өйҙә юҡ инем.**

Улым тәүге аҙымдарын яһағанда һәм теле асылғанда ла өйҙә була алманым, сөнки көнө-төнө тигәндәй, эштән бушаманым. Улым аҙырак үҫә төшкәс: "Атай, мин һине бик яратам, үҫкәс, һинең юлыңдан барасаҡмын", тине. Ҡайһы сакта: "Атай, ҡасан ҡайтаһың?",- тип эшемә шылтырата. "Улым, ҡасан ҡайтырымды әйтә алмайым, сак ҡына көт инде, оҙаҡламай ҡайтырмын һәм бергә циркка йә концертка барырбыҙ",- тип йыуатам.

Йылдар үтә торҙо. Улыма ун йәш тулған көндә уға бик матур туп бүләк иткәйнем, шатлығының сиге булманы. Рәхмәт әйтте лә, туп уйнайыҡ, тине. "Ваҡытым бик тығыҙ бит әле, был аҙнала тамамлайһы эштәр күп. Киләһе аҙнала туйғансы туп тибеш уйнарбыҙ, йәме?" - тинем. "Ярай", тип ризалашты улым күңелһеҙ генә. Улым яҙыу-һыҙыу менән шөғөлләнеп ултырыуымды күреп: "Атай, үҫкәс һинең юлыңды дауам итәсәкмен" - тине бер көн.

Ғүмер үтә торҙо. Ул тәүҙә башланғыс мәктәпте, лицейҙы, һуңынан университетты тамамланы. Моғайын, ир бала үҫтергән күп атайҙар менән шундай хәл булалыр, улым минән ситләшә һымаҡ тойола башланы...

Бер көндө: "Улым, ултыр әле яныма, һөйләшеп алайыҡ"- тинем. Ул, юҡ, тигәнде аңлатып, башын һелкте: "Атай, бик ашығам бит әле, дуҫтарым көтә, машинаңды биреп тор, бараһы ер бар. Икенсе юлы һөйләшербеҙ, йәме",- тип ашығып сығып китте...

Мин картайҙым. Пенсияға сыҡкас, буш ваҡытым да күбәйҙе. Улым күптән икенсе ҡалала йәшәй. Бик һирәк осрашабыҙ. Бер мәл: "Аҙна аҙағында ҡайт, бергәләп ял итербеҙ",- тип шылтыраттым. "Бик шат булыр инем, атай, минең дә һеҙҙе күргем килә. Ҡыҙғаныска күрә, әле генә ҡайта алмайым, эшем бик тығыҙ. Ваҡыт табыу менән ҡайтырға тырышасаҡмын",- тине ул. "Ҡасан осрашырбыҙ? Буш ваҡытың булырмы һуң?"- тип үрһәләндем. "Белмәйем, атай. Бөгөндән үк юлға сығыр инем дә, әлеге мәлдә ваҡытында тапшырылып бөтөргә тейешле эш менән мәшғүлмен. Шылтыратырмын, мотлаҡ осрашып, ялды бергәләп үткәрербеҙ",- тине улым.

Телефон трубкаһын һалғас, башыма ҡылт итеп улымдың бәләкәй сағында: "Атай, үҫкәс һинең юлыңды дауам итәсәкмен" - тигән һүҙҙәре иҫкә төштө. Бәй, ысынлап та, ул минең юлымды дауам итә ләбаһа. Ғаиләм өсөн ваҡыт булдыралмауым арҡаһында берҙән-бер улым, атай һөйөүен татый алмай, минһеҙ үҫте. Хәҙер ул да минең менән бер ике ауыҙ һүҙ һөйләшер өсөн ваҡыт таба алмай...

**Шулай итеп...**

**Бала сағында мине күрергә зарыҡҡан улым кеүек, уның менән бер ултырып һөйләшер көндө көтөп хәҙер мин тилмерәм... Ниндәй үкенес...**

**Эйе, атаһынан өлгө алып үҫкән баланың хыялы тормошка ашты...Ул атаһы юлынан бара...**

ИШАРА

# ИР-ЕГЕТТӘН АЗАМАТЛЫҠ КИТҺӘ,

## Азатлығы бөтә, халҡы бөтә...



**Илдең һәм милләттең ышаныслы тоткаһы, булырҙай ирҙәр бөгөн ни өсөн ваҡлана бара һуң? Ни өсөн хәҙер уларҙың күп кенә вазифаһын, ил һәм ғаилә йөгөн ҡыҙ-ҡатындар үҙ иңенә йөкмәргә мәжбүр? Ни өсөн ғаиләлә һәм йәмғиәттә ир-ат абруйы көндән-көн түбән төшә бара? Бисә холоҡло ирҙәр күбәйеүендә кем ғәйепле һуң: бөрек кейеүсе заттар үҙҙәреме, әллә йәмғиәтме, әллә заманмы? Ир-аттарҙың тормош позицияһын юғалтыуы тәбиғи процесмы, әллә ниндәйҙер сәйәсәт һөҙөмтәһе генәме?**

Ир-аттың ғаиләлә һәм йәмғиәттә тотҡан урыны проблемаһына ҡағылған ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында ентекләп тикшереп, бихисап ғилми хеҙмәттәр, том-том китаптар яҙырға ла, уларҙы баҫып сығарырға ла булыр ине. Яҙалар ҙа, сығаралар ҙа. Тик уларҙың файҙаһы юҡ тиерлек, сөнки һәр бер яңылыҡ ғилми йәки фәнни фекер генә булыу кимәлендә уҙмай. Фекер бары тик фекер булғаны өсөн генә йәшәй, ә ир-аттың абруйы көндән-көн төшә. Үҙ-үҙҙәрен яҡлай алмаған ирҙәрҙе хәҙер закон да яҡлай алмай. Хатта закон яҡлаған хәлдә лә, уларҙың тәбиғи инстинкты юҡҡа сыҡҡан тиерлек. Мәсьәлә асыҡ килеш ҡала килә.

Ә бына православие донъяһы менән йәшәгән христиандарҙа, Ислам ҡанундарын алға һөргән мосолмандарҙа юғарыла һанап кителгән проблемалар бөтөнләй булмаған да тиерлек. Һынылыштың 1917 йылда башланғанын берәү ҙә инкар итмәҫ. Минеңсә, яңыса тормош ҡороп, шул ҡоролоштоң закондарын сығарыусыларҙан башланғандыр, тием юғарыла "Ни өсөн?.." тип ҡуйылған мәсьәләләрҙең емерткес асылы. Был системаның күп тиҫтәләгән йылдар һуҙымында юҡ ерҙән синфи дошман эҙләүе килтереп еткерҙе бит илебеҙҙе шәхес культына.

Ленин "пролетариат диктатураһы" тип атаған был машина тәүҙә баррикаданың теге яғында тороусыларҙы ҡыйраткандан һуң, ил халҡын даими ҡурҡытып йәшәтеү маҡсатында "синфи дошмандарҙы" үҙ кешеләре араһынан эҙләп табып, тәүҙә фашлап, аҙаҡ юҡ итә башланы. "Беҙҙә хәҙер хеҙмәт модала" тип яҙған шиғыры өсөн мещанлыҡта ғәйепләнеп, башы ГУЛАГта серегән шағирҙарҙы ла беләбеҙ. "Синфи дошман эҙләү" механизмы тәүҙә бер үк фирҡәлә, коллективта, ойошмала эшләүселәрҙең араһына "шикләнеү шылтыраһы" ҡаҡты, аҙаҡ шул үк ҡулайлама йәмғиәттең ячейкаһы булған ғаилә кимәлдәренә төшөрөлдө.

Советтар Союзы тип аталған илдең төп йәшәү ҡануны - Конституцияһы һәм башҡа закондары, әлбиттә, тап ошо юҫыҡта яҙылды ла инде. Һәм революцияға тиклем дини закондар менән йәшәгән, ғаилә башлығы булған ирҙең тәбиғи хоҡуҡтары ҡыҙ-ҡатындарҙыҡы менән тиңләнде, дөрөҫөн әйткәндә, юҡҡа сығарылды, тиерлек. Тағы ла аныҡлабыраҡ әйткәндә, атап әйтелмәһә лә, "үҙебеҙҙекеләр араһынан синфи дошман эҙләү" механизмы ирҙәргә ҡарата ла йүнәлтелде. Ирҙәргә "үҙ ҡатынын иҙеп тотоусы" тигән ярлыҡ тағылмаһа ла, яңы закондар асылы уны күп йәһәттән хоҡуҡһыҙ ҡалдырҙы.

Мин бында ҡыҙ-ҡатындарға күп һандағы өҫтөнлөктәр, уларҙы яҡлаусы закондар зарурлығын инкар итмәйем. Әммә ирҙәрҙән асылда нәфис заттың быуаттар буйына иҙеп тотоусы "антогонист" күрергә ынтылыу яңы закондарҙа ярылып ята һәм улар әлеге көндә лә үҙ көсөндә. Һөҙөмтәлә совет системаһы бер кемдең дә ҡыҫылырға хаҡы-хоҡуғы булмаған ир менән ҡатын мөнәсәбәтенә ҡыҫылып, күберәк ҡыҙ-ҡатындарҙы яҡлаусы закондар сығарып, ысынында, уларҙы бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ғына ҡуйҙы, бер-береһенә синфи дошман яһаны.

Донъялағы иң гуманлы тип иҫәпләнгән совет суды ғаилә мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә асылда ҡыҙ-ҡатын хоҡуҡтарын яҡланы һәм яҡлай. Беренсенән, закондар шулай яҙылған, икенсенән, суд ирҙәрҙе яҡлай алмаған ҡыҙ-ҡатындарҙы яҡларға мәжбүр, өсөнсөнән, беҙҙең йәмғиәттә ир-аттың хоҡуҡтарын яҡлаусы әхлаҡи нигеҙҙәргә 1917 йылда уҡ балта сабылған. Һөҙөмтәлә нимә килеп сыға: илебеҙ законсылары үҙҙәре уйлап сығарған закондарҙың кешегә кире һөҙөмтәһенән һаҡлаусы закондарҙы үҙҙәре үк уйлап сығара. Бына шундай абсурд...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,**
**Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.**
**Халҡы бөткән ирҙәр ирегет тип**
**Аталырға тулы хаҡы бөтә.**
**Шундай заманда йәшәйбеҙ, егеттәр, хоҡуҡһыҙ азаматлыҡ та юҡ. Улай тиһәң, закондарҙы ла үҙебеҙ сығарабыҙ бит.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов биатлонсы Максим Чудовты һәм уның тренеры В.А. Никитинды Италияның Антерсельва ҡалаһында үткән биатлон буйынса донъя чемпионаттарындағы уңышлы сығыштары менән ҡотланы.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Республика йортонда "Уралсиб" финанс корпорацияһы президенты Николай Цветков менән осрашты. Эш осрашыуында "Уралсиб" банкыһының 2006 йылғы эш һөҙөмтәләре тикшерелде һәм республика менән финанс корпорацияһы араһындағы эшлекле бәйләнештәрҙе артабан үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды.

✓Республика йортонда Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимовтың 2007 йылға Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға Мөрәжәғәтнамә проектын әҙерләү буйынса эшсе комиссияның беренсе кәңәшмәһе булып үтте. Проекттың концепцияһы һәм структураһы тураһында фекер алышыу - кәңәшмәнең төп темаһы булды. Быйылғы Мөрәжәғәтнамәне хоҡуҡи-дәүләт, иҡтисад һәм социаль блоктарҙан торорға тигән тәҡдим бар.

✓Башҡортостанда дарыуҙар менән өҫтәмә тәьмин итеү программаһы буйынса эшләүсе тағы ла өс дарыухана пункты асылды. Улар Баймаҡ районының Темәс ауылында, Ҡариҙел районының үҙәк район дауаханаһында һәм Дүртөйлө районының Мәскәү ауылында эшләй башланы.

✓Республика онкология диспансерында юғары медицина технологиялы лаборатория асылды. Әлек операция яһау мөмкин түгел тип һаналған ауырыуҙарҙы хәҙер лабораториялағы юғары технологиялар ярҙамында дауалап, эндоскопик операциялар яһала һәм яман шеште дауалауҙың яңы ысулдары индерелә.

✓Мартта Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында үткәреләсәк "Шифахана-2007" Бөтә Рәсәй форумына әҙерлек эштәре башланды. Мәскәүҙән эш сәфәре менән килгән делегация Башҡортостандағы ял итеү һәм дауаланыу учреждениеларына юғары баһа бирҙе.

✓18-19 февралдә Башҡортостанға Арктиканан һалҡын һауа массаһы килеүе көтөлә. Һауа температураһы төндә 30-35, ҡайһы бер райондарҙа 42 градусҡаса һалҡын булһа, көндөҙ 20-27 градус буласаҡ һәм һыуыҡтар бер-ике көн дауам итәсәк.

✓ *Пенсия реформаһын яҡшыртыуға арналған был документ уны юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән булып сыҡты. Уға ярашлы беренсе сиратта бөгөнгө пенсионерҙарға түләүҙәрҙең күләмен арттырыу мәсьәләһен хәл итергә кәрәк.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Тынысландығыҙмы, йәмәғәт? Иркен йәшәй башланығыҙмы? Магазин тулы аҙыҡ-түлек, йәнең теләгән кейем-һалым, илдә тынысլыҡ тиңегеҙ инде? Ысынлап та шулай. Нефтҡә һәм газға хаҡтар күтәрелде, эш хаҡын, пенсияларҙы, стипендияларҙы ваҡытында түләй башланылар. Бала тапҡан өсөн 250 мең вәғәҙә итәләр. Сифатлы һәм арзан торлаҡ төҙөп бирербеҙ, тиҙәр.**

# Арттыралармы, әллә юҡҡа сығаралармы?

## Михаил Зурабов пенсия реформаһын тамамларға ашыға

Милли проекттарҙы тормошка ашыра башлау һеҙҙәмтәһендә табибтар һәм уҡытыусыларҙың эш хаҡтары бермә-бер артты. Халыҡ яҡшы, етеш тормош төмәнә аҙмы-күпме өйрәнеп бара кеүек. Тамаҡ туйҙырып, күнел асҡың килһә, ҡала тулы ресторан-кафелар, ҡыш көнө һыу инергә теләһәң, аквапаркка рәхим ит. Тауҙан саңғы менән шыуам тиһәң, Швейцарияға барырға түгел. Бөтәһе лә үҙебеҙҙә бар хәҙер. Аҡсаһы мулыраҡ булғандар өсөн, әлбиттә. Халыҡ тоҙ, шәкәр, шырпы, бәҙрәф ҡағыҙын запаслауҙы онотто. Кибеттәр тәүлек әйләнәһенә эшләй. Тәмәке, араҡы тип, һыуҙай оҙон сираттарҙа баҫып тороу хәтерҙән юйылып бара. 10-15 йәштәгеләр "талон" тигән һүҙҙең мәғәнәһен дә белмәй, улар "купон" һәм "дисконт картаһы" тигәндә генә аңлай, шикелле. Иҫ китмәле тормош. Хатта 1998 йылғы "дефолт" тигән афәт тә иҫтән сығып бара.

Еңелерәк йәшәй башланыҡ. Кеше аңһатка тиҙ өйрәнә шул. Сәйәсмәндәр, сәйәси күҙәтеүселәр, журналистар "2008 йыл проблемаһы" тип беҙҙе ҡурҡытып ҡарай. Шөрләмәйбеҙ. Путин артабан да эҙмә-эҙлеклелек буласаҡ, тип тынысландырҙы лабаһа беҙҙе. Ышанабыҙ уға. Иң мөһиме, реформалар, үҙгәртеп ҡороуҙар кеүек нәмәләр ишетелмәгән һымаҡ. Хәйер, үҙгәртерлек бар нәмә үҙгәреп бөттө бит инде.

Һәр хәлдә, быға тиклем шулай тойола ине. Әммә үткән аҙнала өҫтән, йәғни Мәскәүҙән, төшкән бер хәбәр күптәрҙе уйланырға - бөгөнгө хәстәр хаҡында түгел, кемдер өсөн яҡын, ә кемдер өсөн алыҫыраҡ булған, әммә барыбер иртәме-һуңмы килеп етәсәк көн, йәғни пенсия тураһында борсолорға мәжбүр иткәндәр.

Әкиәттәгесә - башлайыммы баштан? Михаил Зурабов тигән әҙәмде беләһегеҙме? Эйе, һаулыҡ һаклау һәм социаль үҫеш министры ул. Уның исеме һуңғы арала йыш ҡына яңғырай. Матбуғатта ла, ябай халыҡ араһында ла. Пенсионерҙар, мәсәлән, "рәхмәт" уҡыйҙар уға. Төрлө кимәлдәге ташламаларҙы юҡ итеүгә булышлыҡ иткәне өсөн. Льготалы дарыуҙарҙы һатып алыу менән бәйле ҡаңғырыҡта ла Зурабовтың фамилияһы ишетелеп ҡала. Бер һүҙ менән әйткәндә, данлыҡлы кеше инде. Шул бәндә етәкселек иткән министрлыҡ бер ҡыҙыҡлы документ проекты әҙерләп ҡуйған икән. Тәү ҡарашка матур ғына яҙылған һымаҡ. Әммә уны ҡабул итеп тормошка ашыра башлаһалар, 1998 йылғы дефолт балалар уйынсығы һымаҡ ҡына тойоласаҡ. Пенсия реформаһын яҡшыртыуға арналған был документ асылда иһә, уны юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән булып сыҡты. Уға ярашлы беренсе сиратта бөгөнгө пенсионерҙарға түләүҙәрҙең күләмен арттырыу мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Дөрөҫ ҡарар, һүҙ юҡ. Әммә аҡсаны ҡайҙан табырға? Дәүләт ҡаҙнаһынан алырға мөмкин булыр ине лә бит... Ләкин Зурабов икенсерәк юл һайлаған. Ул бөгөн пенсияны арттырыу өсөн киләсәк быуын пенсияһының бер өлөшөн тартып алырға самалай. Ни эшләргә тәкдим итә һуң ул?

2002 йылда башланған пенсия реформаһына ярашлы, 1967 йылда һәм унан һуңыраҡ тыуған кешеләрҙең пенсиялары өс өлөштән тора. Пенсия фонды йыл һайын ебәреп торған "бәхет хат"тарын алһағыҙ, быны абайлағанһығыҙҙыр. Берәһен дәүләт тулыландыра, икенсеһен кешенең эш урынынан күсерәләр, ә өсөнсөһөн эшләп йөрөгәндәр үҙҙәре иҫәбенә байыта. Йәғни пенсия Совет заманындағы һымаҡ бер кимәлдә түгел, ә төрлөсә - эшләгәненә ҡарап, түбәнерәк, йәки түбәнерәк булыуы ихтимал. Киләсәгендә үҙең ҡайғыртаһың, йәнәһе. Һәйбәт итеп эшләһәң, пенсия ла юғары булырға тейеш. Бынан тыш, пенсияның өстән бер өлөшөн шәхси идара итеүсе компанияға тапшырып, уның күләмен тағы ла арттырырға мөмкин. Асылда иһә, халыҡ төрлө "МММ" кеүек фирмаларҙың "эшмәкәрлегенән" һуң шәхси компанияларға ышана һалып бармай һәм буласаҡ пенсияларын дәүләт ҡарамағында йәғни, Внешэкономбанк иҫәбендә, ҡалдырҙы. Ә дәүләт ул аҡсалар менән ни эшләргә белмәй, шуға ла халыҡтың буласаҡ пенсияларын инфляция "ашап" бөтөп бара. Шуға ла Зурабовтың фекере буйынса был аҡсаларҙы әлеге ваҡыттағы пенсияларҙы арттырыу өсөн бөгөнгө көнгә 100 миллион һумдан ашыу дефициты булған Пенсия фондына күсерергә кәрәк. Ә аҡсаларын ваҡытында, йәғни биш йыл эсендә, шәхси идара итеүсе компанияларына тапшырып өлгөрмәгәндәр иһә тупланып өлгөргән пенсияларының кәмендә өстән бер өлөшөнән колаҡ ҡағасаҡ.

**Михаил Зурабовтың тәкдимдәренең мәғәнәһе нимәнән ғибәрәт һуң? Эш, ғәҙәттәгесә, сәйәсәткә барып төртөлә. Билдәле булыуынса, быйыл беҙ Дәүләт Думаһы депутаттарын, ә 2008 йылда ил Президентын һайлаясаҡбыҙ. Һайлауҙар алдынан әҙмекүпме кешенең күңелен күргекилә бит. Пенсионерҙар һайлауҙарға әүҙем йөрөгәндәрҙән һанала. Уларҙың пенсиялары арттырылһа, тейешле кандидатура өсөн тауыш биреүҙәренә өмөтләнергә була. Шулай итеп, Зурабов был проектты үҙе уйлап сығармаған, ә уға өҫтәнәрәк кемдер ҡушҡан, тип фаразларға мөмкин. Ә ун биш-егерме йылдан пенсияға сығырға ниәтләгәндәрҙе тынысландырырға мөмкин - беҙҙең илдә бөтә нәмә шул тиклем тиҙ һәм аңлайышһыҙ үҙгәрә. Шуға ла пенсия йәшенә еткәнсе тағы ла әллә күпме реформа булыр әле. Иҫән-һау булһаҡ.**

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## Әхләк кодексы

**Боронғо ҡытайҙарҙың йәшәү фәлсәфәһе, донъяға мөнәсәбәте һуңғы йылдарҙа донъя халыҡтарында ҡыҙыҡһыныу уята. Уларҙың, мәсәлән, "Йәш кешегә бүләк" тигән әхләки ҡағиҙәләр китабы бар. Был китапҡа 177 ҡаңғәште берләштергән 77 ҡағиҙә тупланған. Европаның йәшәү ҡағиҙәләренән айырмалы, боронғо ҡытай иҫкәртеүҙәре "тегеләй ит, былай эшлә" тигән бойороҡтарҙан алыҫ. Улар файҙалы ғәҙәттәр ярҙамында үҙеңдә холоҡ-фиғел тәрбиәләүҙе күҙ уңында тота.**

Йәш кеше өсөн әхләки ҡағиҙәләр китабы быуа тигән юл күрһәткес һәм алыштырғыһыҙ кәңәшсе, тормош ығы-зығыһын еңеп сығыуҙа остаз ролен үтәй. Ата-әсәләр уны бала тәрбиәләүҙә етәксе - ҡулланма, ғаилә кодексы итеп ҡуллана ала. Китап менән тотошлай танышыуҙы үҙегеҙгә ҡалдырып, ундағы бер нисә ҡағиҙәгә генә иғтибарығыҙҙы йүнәлтәйек.

**Кемде аҡыллы тип һанарға?**

- Маҡсатына тайпылышһыҙ хеҙмәт итеүсене
- сер һаҡлай белеүсене
- аҡыллы кешеләр һүҙенә ҡолаҡ һалыусыны
- яңылышыуын ваҡытында аңларға һәләтле кешене
- иҫерек көйө һүҙ буҡтаһы бешермәгән кешене.

**Кем матди хәлен яҡшыртыуға иҫәп тота ала?**

- Егәрле һәм һаҡсыл кеше
- белемен камиллаштырыу өҫтөндә даими эшләүсе
- эскегә бирелмәгән, ҡатын-ҡыҙ менән шаярмаған кеше
- һуң ятып, иртә тороусы
- ғаиләһендәге ҡатын-ҡыҙ үҙ-ара татыу йәшәгән кеше.

**Ułандарҙың бурысы:**

- ата-олатайҙар эшенә, уларҙың рухына тоғролоҡ
- әйткән һүҙгә тоғролоҡ
- намыҫлы һәм әҙәпле булыу, ғәҙеллеккә тоғролоҡ
- дәрәжәңдә төшөрмәү
- итәғәтле булыу
- аҡыл эйәләре менән дуҫлашыу
- уйынға, күңел асыуға бирелмәү
- алдыңа алған маҡсаттан тайпылмау
- маҡсатыңдың асылын асыҡлау.

**Ҡыҙ-ҡырҡындың бурысы:**

- ҡатын-ҡыҙ эшен ентекле үҙләштереү
- ризыҡ-тәғәмдең кеше организмы өсөн ҡайһыны файҙалы булыуын өйрәнеү
- татлы телле, әҙәпле булыу
- ғиффәтле булыу
- ғәйбәт һөйләмәү
- өлкән йәштәгеләргә ҡарата хәстәрлекле булыу.

**Нимә ул ахмаҡлыҡ?**

- Аҡсаң була тороп та, бурысыңды ҡайтармау
- етешһеҙлегеңде аңлап та, уны төҙәтмәү
- кешенең хеҙмәтен һәм иждадын хурлау
- ғәйебеңде танымау, кешенән ғәйеп эҙләү
- ярлы була тороп та бай булып ҡыланыу.

**Аҡылһыҙлыҡ:**

- ҡырҡка бөгөлөп кемгәлер ярарға тырышыу
- кешене рәнйетеү һәм шуны ғәфү итерҙәр тип өмөтләнеү
- кеше ғаиләһенә ҡыҫылыу
- кешенең артында уның етешһеҙлектәре хаҡында һөйләү.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала 35 мең кеше фермерлыҡ менән шөғөлләнә, 584 мең ғаилә шәхси хужалығында продукция етештерә. Төбәктә етештерелгән тулайым ауыл хужалығы продукцияһының 67,3 проценты улар өлөшөнә тура килә. БР Крәҫтиән (фермер) һәм ауыл хужалығы кооперативтары ассоциацияһының XIX конференцияһында уның президенты Шамил Сатаев билдәләүенсә, былтыр республика фермерҙары 3,6 миллиард һумлыҡ продукция етештергән.

✓Өфөлә БР Эске эштәр министрлығының бокс буйынса асыҡ шәхси-команда чемпионаты бара. Милиция генерал-майоры Рауил Фәйрузовка арналған был сара быйылдан башлап халыҡ-ара статусҡа эйә. Шуға ла унда был юлы Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Үзбәкстандан һәм Германиянан да боксерҙар ҡатнаша.

✓Бәләбәйҙә ун беренсе тапҡыр "Илһам шишмәләре -2007" фестивале үтәсәк. Конкурска әҫәрҙәрҙе 10 мартка тиклем ебәрергә. Белешмәләр өсөн телефондар: 8 (216) 3-22-66, 3-23-02, 3-17-02.

✓БР Үҙәк һайлау комитеты мәғлүмәттәре буйынса, 11 мартта үтәсәк муниципаль һайлауҙарҙа 17 мең кандидат ҡатнашасаҡ. Был көндә Башҡортостан халҡы 910 ауыл Советына власть органдары һайлаясаҡ. Ошо уҡ көндә республиканың 11 муниципаль районында һәм Яңауыл ҡалаһында депутаттарҙы өҫтәмә һайлау үтәсәк, шулай уҡ Өфөнөң Инорс һайлау округынан БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутат һайланасаҡ.

✓Өфө ветерандарының ирҙәр йыйылма командаһы волейбол буйынса Европа чемпионатында Рәсәй намыҫын яҡлап сығыш яһаясаҡ. Чемпионат быйыл сентябрҙә Грецияла үтәсәк.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары урынбаҫарҙары, опека һәм попечителлек буйынса белгестәр менән ҡарауһыҙ ҡалған балаларҙы урынлаштырыу мәсьәләләре тураһында семинар-кәңәшмә үтте. Был йүнәлештә Өфө ҡалаһы тәжрибәһенә төп иғтибар бүленде. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев билдәләүенсә, былтыр ҡараусыһыҙ ҡалған балалар һаны 4036-ға барып еткән. Уларҙың 180-е уллыҡҡа алынған, 2533-ө опекаға бирелгән, 131-е балалар йорттарында тәрбиәләнә.

✓ 18 февралдә Сибайҙа тәүге тапҡыр балыҡсылыҡ буйынса ҡала чемпионаты үтәсәк. Балыҡсылар Төйәләҫ йылғаһы буйында көс һынашасаҡ.

*✓ Уҡытыусыларҙың яңы технологиялар ҡулланып эш итергә өйрәнеүе ҡыуандырһа, ҡайһы бер бәйгеселәрҙең жюри һорауҙарына яуап бирә алмай, тик үҙ предметы ҡыҫаһында ғына ҡалыуы борсоуға һалды.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## Армияла…ата-әсәләр ҙә "хеҙмәт итә"

✓Күптән түгел Рәсәйҙең оборона министры Сергей Иванов, хәрби комиссариаттар эргәһендә хәрби көстәрҙәге хәл-торошҡа йәмәғәтселек контроле булдырыу өсөн ата-әсәләр комитеттары булдырыласаҡ, тигәйне. 15 ғинуарҙа ул шуға ярашлы указға ҡул ҡуйҙы. Башҡортостандың хәрби комиссариаттарында улдары хәрби хеҙмәт үтәүсе ата-әсәләрҙең тәүге йыйылышы булып үтте.

БР хәрби комиссариаты республиканың район һәм ҡала хәрби комиссариаттарына был бурысты үҙ ирке менән үтәргә теләүселәрҙе Өфөгә ебәрергә тәҡдим иткәс тә ата-әсәләр Комитеты составында ингән ун туғыҙ кеше баш ҡалаға килгән. Комитет ағзалары Республика хәрби комиссариатында осрашыу үткәргәндән һуң, рәйес, ике урынбаҫар һәм сәркәтиб һайлаған.

Комитет ағзалары ата-әсәләргә улының хәле һәм хәрби хеҙмәтенең ниндәй шарттарҙа үтеүе тураһында хәбәр итеп торасаҡ. Улар шулай уҡ һалдаттың нисек йәшәүен, нисек туҡланыуын, ҡайҙа йоҡлауын үҙ күҙҙәре менән күреү өсөн теләһә ҡайһы хәрби часҡа бара ала. Башҡортостандағы ата-әсәләр комитеты ағзалары беренсе тикшереүҙе 23 февралдә үк үткәрергә уйлай. Ата-әсәләр шулай уҡ егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә алыу тәртибен һәм уны нисек ойоштороуҙарын да күҙәтә аласаҡ. Әгәр буласаҡ һалдат хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылһа, комитет Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан белгестәр саҡыртасаҡ. Комиссияла ата-әсәләрҙең барыһы ла түләүһеҙ эшләйәсәк. Улы хәрби хеҙмәттә булған ата-әсәләр генә комитет ағзаһы була ала. Әгәр балаһы имен-аман хәрби хеҙмәтен тамамлаһа, ул үҙенең урынын икенсе кешегә бушатырға тейеш.

## Өс йылда…11 баҙар бөтөрөләсәк

✓Баш ҡалалағы ларек тибында эшләүсе 38 баҙарҙың 11-е ябыласаҡ. Октябрь проспектындағы Совет, Комсомол урамындағы "Сауҙа рәттәре" һәм Р.Зорге урамындағы "Солнечный" тип исемләнгән баҙар майҙансыҡтары эшләүҙән туҡтаны ла инде. Мәҫәлән, Р. Зорге урамындағы баҙар ябылғас, уның ҡаршыһында аҙыҡ-түлек супермаркеты асылды. Шулай уҡ Гагарин, Менделеев баҙарҙары урынында ла күңел асыу-сауҙа комплекстары асыу ҡаралған. "Тополь" баҙарын да яңыртылған сауҙа комплексы алыштырасаҡ. Был комплекстарҙың һәммәһендә лә "Пятерочка" һәм "Полушка" тибындағы эконом-класс магазиндары эшләйәсәк.

2009 йылға тиклем "Иҫке Өфө", Кировский, "Гагарин", "Ильин", "Полянка", "Тополь", "Табын", "Рәфис", "Затон" һәм "Менделеев", "Комсомол" баҙарҙары эшләүҙән туҡталырға тейеш.

АФАРИН!

# Эшләй белгәнде…

## баһалай beләләр

**Баш ҡалала "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2007" ҡала конкурсына йомғаҡлау тантанаһы булып үтте. Бәйгеселәрҙе тәбрикләргә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, юғары уҡыу йорттары, ойошмалар етәкселәре килде.**

Быйылғы бәйгелә уҡытыусылар педагогик концепцияларын яҡланы, таныш булмаған синыфтарҙа дәрестәр үткәрҙе. Ә ярым финалға сығыусылар ижади оҫтаханала сығыш яһаһа, финалға сыҡҡандар аудитория алдында асыҡ сығыш күрһәтте. Уҡытыусыларҙың сығыштарын ҡарағандан һуң шундай фекергә килдек: конкурстың талаптары башҡа йылдарҙыҡы менән сағыштырғанда йылдан-йыл көсәйә, бәйгеселәрҙең дә кимәле күтәрелә бара. Мәҫәлән, педагогик стаждың биш йылдан да кәм булмауы, бәйгесенең юғары филологик белемгә эйә булыуы быйылғы сараның төп шарты булып торҙо. Ун көн дауамында барған конкурста уҡытыусылар педагогик оҫталығын да, заман менән бергә атлаған алдынғы ҡарашлы шәхес, ғалим булыуын да иҫбатланы, сәсәнлек һәләтен дә аса алды. Жюри ағзаларына ла был йәһәттән иң-иңдәрҙе һайлау еңелдән булманы.

- Уҡытыусыларҙың яңы технологиялар ҡулланып эш итергә өйрәнеүе ҡыуандырһа, ҡайһы бер бәйгеселәрҙең жюри һорауҙарына яуап бирә алмай, тик үҙ предметы ҡыҫаһында ғына ҡалыуы борсоуға һалды. Мин уҡытыусыларҙың киң эрудициялы, тормош ағышы, донъялағы, илдәге сәйәси хәл-ваҡиғалар, яңы фәнни асыштар менән хәбәрҙәр булыуын теләр инем, - ти "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" конкурсының жюри рәйесе, филология фәндәре докторы, профессор Ғиниәт Ҡунафин.



Гөлсөм Әбдрәхимова, Ирек Әхмәтшин, Гүзәл Фәхрисламова, Миңлегөл Мусаҡаева

Балаларҙы яратҡан, ысын мәғәнәһендә үҙ эшенең оҫтаһы булған, тырыш, көслө ихтыярлы уҡытыусылар араһынан финалға сығыу бәхете өс кешегә тәтене. Бына улар: 140-сы башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ирек Әхмәтшин, 112-се мәктәптән Гүзәл Ҡаһирова, 38-се мәктәптән Гөлсөм Әбдрәхимова. Ә "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" конкурсы еңеүсеһе тигән исемгә Орджоникидзе районының 156-сы мәктәбе уҡытыусыһы Гүзәл Фәхрисламова лайыҡ булды.

- Һәр бер балала шәхес күрә, уҡыусыларҙы үҙ артыңдан әйҙәй белергә кәрәк. Уҡытыусы һөнәрен һайлаған йәш коллегаларыма теләктәрем шул: көрәшегеҙ һәм эҙләгеҙ, табығыҙ һәм бирешмәгеҙ, - ти балаларҙы, үҙ эшен яратҡан, 21 йыл ғүмерен йәш быуынды тәрбиәләүгә бағышлаған педагог Гүзәл Иштимер ҡыҙы.

**Рәлиә ТӘҮЕЛБАЕВА.**

### ШУЛАЙ ИТЕП…

**"Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә" тиҙәр халыҡта. Һәр өлкәлә һөнәри ярыштар үткәреү яңы исемдәр асырға, һәләттәрҙе күрергә, үҫтерергә булышлыҡ итә. Үҙ өҫтөндә эшләгән, белемен камиллаштырған, эҙләнеүсән шәхес кенә тәбиғәттән һалынған һәләтен тулыһынса аса, мөмкинлектәрен файҙалана, халҡына хеҙмәт итә ала. "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2007" конкурсы ла йылдан-йыл камиллашһын, тел һаҡсыларының бәҫе артһын, ә сарала ҡатнашыусыларға әйтелгән яҡты теләктәр, аҡыллы кәңәштәр уҡытыусыларҙы яңы бейеклектәргә ҡанатландырһын ине.**

…ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# Баш ҡалабыҙ…

## байрамға әҙерләнә

**Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләте составына инеүенең 450 йыллығына арналған юбилей тантаналары Дуҫлыҡ монументы янында, Ағиҙел ярында үтәсәк һәм Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙары ҡатнашлығындағы концерт кискә тиклем дауам итәсәк. Байрам программаһының айырым өлөштәре Өфө ҡала округы хакимиәтендә баш ҡалала махсус төҙөлгән ойоштороу комитеты ултырышында тикшерелде.**

Ленин исемендәге майҙанда йәш быуындың Тыуған илгә һөйөүен, халыҡтар араһында дуҫлыҡты данлаусы "Йырлайым Ватаным" тигән йәштәр байрамын үткәреү планлаштырыла. Йәштәр концерты байрам фейерверкы менән тамамланасаҡ.

Тантаналарҙа Өфөнөң бөтөн районындағы майҙандар, мәҙәниәт йорттары һәм һарайҙары, ял парктары, үҫмерҙәр клубтары, мәктәптәр һәм стадиондар эшләйәсәк. Ултырышта шулай уҡ һүҙ баш ҡалала төҙөлөп ятҡан "юбилей" объекттары тураһында ла барҙы. "Өфөләге бөтөн эре төҙөлөш объекттары графикҡа ярашлы тотҡарлыҡһыҙ бойомға ашырыла",- тине ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Хәлимов.

Аэровокзал майҙанын реконструкциялау һөҙөмтәһендә уның майҙаны ике тапҡырға - 11 мең квадрат метрға ҙураясаҡ. Терминалдың пассажирҙарҙы үткәреү һәләте сәғәтенә 400-ҙән алып 600-гә тиклем, ә транзит пассажирҙарҙы ҡабул иткән осраҡта сәғәтенә 800 кеше үткәрерлек кимәлгә етәсәк. Хәҙер унда ҡоролмаларҙы урынлаштыраһы ғына ҡалған. Тимер юл вокзалы эргәһендәге төҙөлөш майҙанында ла эш ҡайнай. Бында тиҙҙән пассажирҙарҙы вокзал алды майҙанын һәм вокзалдың реконструкцияланған төп бинаһын, заманса инженерлыҡ коммуникация селтәрҙәре һәм технология ҡоролмалары менән йыһазландырылған ер аҫты юлдарын үҙ эсенә алған быяла, бетон һәм металлдан эшләнгән заманса комплекс ҡаршы аласаҡ. Тимер юл вокзалы 6600 пассажир һыйҙырышлы буласаҡ.

Башҡа төҙөлөш объекттарында ла эштәр киң масштабта алып барыла. Бер нисә мәктәп, дауахана, спорт ҡоролмалары, мәҙәни күңел асыу үҙәктәре һәм башҡа учреждениелар файҙаланыуға тапшырылды ла инде.

Юбилей тантаналарына баш ҡаланың нисек төҙөкләндерелеүе тураһындағы мәғлүмәт менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Владимир Федоров таныштырҙы. Был маҡсатта 2006 йылда бюджеттан бөтәһе 4107, 35 миллион һум аҡса тотонолған. Быйыл иһә торлаҡ йорттарҙы ремонтлау һәм төҙөкләндереү өсөн 301 миллион һум кәрәк буласаҡ.

Шулай уҡ яңы юлдар һалыу, уларҙы төҙөкләндереү, ҡалаларҙағы юлдарға капиталь ремонт яһау эштәре лә киң масштабта алып барыла. Транспорт туҡталышы павильондарын яңыртыуға, сәскәле ерҙәрҙе йәшелләндереүгә, сәскәләр ултыртыуға айырым иғтибар бүленәсәк.

Ҡала округы хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлегендә хәбәр итеүҙәренсә, ойоштороу комитеты ултырышында ҡаланы байрамса сағыу итеп биҙәү эскиздары ла ҡаралған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

☑ Өфөлә ҡала прокуратураһы асылды. Уның штатындағы егерме кешенең ун бише - оператив хеҙмәткәр. Өфө прокуроры вазифаһына тәғәйенләнгән Зөфәр Сафин 15 йыл ҡаланың Орджоникидзе районы прокуроры булып эшләгән.

☑ "Слово" нәшриәте 2007 йылға Өфөнөң юбилей даталары календарен нәшер итте. Баҫма Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығына арналған.

☑ Өфөлә хәҙер ауыл хужалығы йәрминкәләре аҙнаһына ике тапҡыр йәғни кесаҙна һәм шәмбе көндәрендә эшләйәсәк. Баш ҡала кешеләренә магазиндағыға ҡарағанда күпкә арзан аҙыҡ-түлекте Өфөнөң Калинин (Интернационал урамы 139), Ленин (Әхмәтов ур. 325/1) һәм Октябрь (Рыльский ур. 17) райондарында аҙнаһына ике тапҡыр эшләгән баҙарҙарҙан һатып алырға мөмкин буласаҡ.

☑ 24-25 февралдә баш ҡалала мотоуҙыш буйынса шәхси чемпионат финалы үтәсәк.

☑ Өфөлә йыл башынан 120-нән 80 уйын залы ябылған. Ҡалған 40 салондың 31-е махсус комиссияның артабан эшләүгә рөхсәтен алған.

☑ Баш ҡалала ваҡлап һатыусы сауҙа һәм дөйөм туҡланыу предприятиеларының тауар әйләнеше 120 миллиард һумлыҡтан артып киткән. Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары идаралығы начальнигы Ирина Рублева әйтеүенсә, Өфөләге ҡулланыу баҙарында тотороҡлолоҡ һаҡлана. Былтыр халыҡтың реаль килеме 21 процентҡа күтәрелгән, шуның менән бәйле һатып алыу мөмкинселеге лә артҡан.

☑ Булып үткән Бөтә Рәсәй "Рәсәй саңғыһы - 2007" ярыштарына Өфөлә генә 16 мең кеше сыҡҡан. Призлы урын яулаусылар хәҙер Сочиҙа үтәсәк Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашасаҡ.

☑ М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы 18-22 февралдә Татарстандың Яр-Саллы ҡалаһында гастролдәрҙә буласаҡ.

☑ 21 февралдә Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се республика башҡорт балалар йорто Ҡурсаҡ театрында үҙенең 85 йыллыҡ юбилейын билдәләй һәм бар тәрбиәләнеүселәрен, эшләп киткән хеҙмәткәрҙәрен тантанаға саҡыра.

**www.ufacitu.info**

АФАРИН!

# Бай төбәктә йәшәгәндәр

## талантҡа ла бай

**(Башы 1-се биттә).**

Ер аҫты һәм ер өҫтө хазиналары-на бай булған урында йәшәгән халыҡ та таланттарға бай була, тиҙәр. Һүҙем шундай таланттарҙың береһе - Сибай балалар һынлы сәнғәте мәктәбенең һынлы сәнғәт оҫтаһы, уҡытыусы-новатор Йәноҙаҡ Ишбирҙе улы Ҡылысов тураһында. Былтыр йыл аҙағында Мәскәүҙең Чайковский исемендәге концерт залында уға милли халыҡ ижадын үҫтереүҙә юғары уңыштарға өлгәшкәне өсөн "Рәсәй рухы-2006" исемендәге конкурстың мең долларлыҡ лауреат премияһын тапшырҙылар. Халыҡ ижадын үҫтереү маҡсатында 2002 йылда булдырылып, йыл һайын бирелә торған был премиялар ЮНЕСКО буйынса комитет тарафынан һәм Рәсәйҙең беренсе Президенты Борис Ельцин фондынан бирелә. Шунан бирле бөтәһе 40 премия тапшырылған да инде. Былтыр конкурсҡа 197 эш тәҡдим ителә. Шуларҙың араһынан унауһы ғына СССР-ҙың халыҡ артисы, профессор Мира Кольцова етәкселегендәге комиссия тарафынан һайлап алына. Йәноҙаҡ Ҡылысов та ошо исемлеккә эләгә.

Кем ул Йәноҙаҡ Ҡылысов?

Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында донъяға килгән Йәноҙаҡ бәләкәй сактан ҡыҙыҡһыныусан булып үҫә. Айырыуса ағастан төрлө һындар эшләү менән мауыға ул. Сибай балалар һынлы сәнғәт мәктәбендә ул был һөнәрҙең серен төрәнерәк аңлай башлай. Төрлө һындарҙы, һауыт-һабаларҙы, башҡорт халыҡ ижадынан алынған композицияларҙы ағастан һырлап эшләү уның яраткан шөғөләнә әйләнә. Ижад бит ул эҙләнеүҙәрҙән ғибәрәт: ағас эше менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, Йәноҙаҡ та төрлө һүрәттәр төшөрә, металдан да һындар ҡоя. Барыһын да булдыра ижад ҡомары ҡағылған егет. Әммә уның иң ҙур ынтылышы, ныҡышмалы хеҙмәте - башҡорт халыҡ ижадындағы персонаждарҙы ағас һындарҙа биреү. "Халыҡ йолаларын һаҡлау өсөн ағастан да ҡулай материал юҡ", - ти ул. Үҙенең оҫталығын камиллаштырыу менән бер рәттән, Йәноҙаҡ Ишбирҙе улы уҡыусыларына ла ағас һырлау нескәлектәрен өйрәтә. Уҡыусылары ла Сибайҙа ғына түгел, республика кимәлендәге конкурстарҙа призлы урындар яулай.

Йәноҙаҡ Ишбирҙе улы махсус рәүештә күргәҙмәләр өсөн ижад итмәй, төрлө конкурстар уны үҙҙәре эҙләп таба кеүек. Тәүге уңышы уны Чебоксар ҡалаһында үткән Бөтә Рәсәй үҙешмәкәр ижадсыларының күргәҙмәһендә "эҙләп таба". Артабан Түбәнге Новгородтағы "Ағас-2003, Ағас-2006" конкурстарының икеһендә лә беренсе урынды яулай. "2005 йылдың алтын ҡуллы оҫтаһы" республика конкурсының лауреаты ла - ул. Йәноҙаҡ Ҡылысовтың эштәре Мәскәүҙә, Германияла үткән халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә лә күрһәтелә. Әлеге көндә уның үҙенең һәм уҡыусыларының ағастан һырлап эшләнгән эштәре республика этнография һәм археология музейында, Рәсәй дәүләте халыҡ ижады йортонда һаҡлана.

"Минең барлыҡ байлығым - уҡыусыларым. Уларҙың уңышы - минең йәшәү мәғәнәм, - ти Йәноҙаҡ Ишбирҙе улы. - Һәр кемдең был тормошта үҙ юлы, үҙ һәләте бар. Әммә һәләтте үҫтерә, камиллаштыра белергә кәрәк".

Оҫтаның тормошҡа үҙенә генә хас ҡарашы булыуын уның уңышлы хеҙмәте раҫлай. Хатта сит илдәрҙә лә Йәноҙаҡтың ағас һындарына ҡарап һоҡланалар икән, был тиккә түгел. Быңдай таланттар бөтә Рәсәйҙә лә бик һирәктер, күрәһең. Япониянан килгән тележурналистар уның эш алымдарын төшөрөү менән генә сикләнмәйенсә, "Төньяҡ амурҙары" һәм "Башҡорт балы" исемле композицияларын үҙҙәренә "ҡунаҡҡа" алып ҡайта.

- Һынлы сәнғәттә быңдай юғары уңыштарға өлгәшеүеңдең нигеҙе нимәлә? - тип ҡыҙыҡһыныуыма ул бик үҙенсәлекле яуап бирҙе.

- Ағас һырлау нәҫелдән күскәндер. Олатайымды үҙе тере сакта күрә алманым, әммә ул ағастан эшләгән бик күп мираҫ һаҡланып ҡалғайны. Олатайҙың ҡулы аша үткән өҫтәл-ултырғыстар, һандыҡтар, тәҙрә рамдары, яңаҡтары, көнкүреш әйберҙәре - бөтәһе лә уның оҫта ҡуллы булыуына әлеге көнгә тиклем тере шаһиттар. Уларға һәр саҡ һоҡланмайынса ҡарай алмайым. Ә атайым тимерсе булды. Ул да тимерҙән төрлө көнкүреш әйберҙәрен сынъяһау итеп ҡуя торғайны. Әсәйем иһә үҙенең кул станогында төрлө һырҙар, биҙәктәр төшөрөлгән балаҫтар һуҡты, кейеҙ баҫты, шәл бәйләне. Ул ваҡытында трактор йөрөткән, токарь ҙа булған. "Тимерҙән ҡырып, төрлө әйберҙәр эшләргә ярата торғайным", - ти ул.

Ысынлап та, оҫталыҡ нәҫел аша күсеүсән. Әммә оҫта кулдарға йолалар ныҡлығы, рух тотороҡлоғо ла кәрәк бит әле. Башҡорт егете "Рәсәй рухы" конкурсында юҡҡа ғына еңеү яуламағандыр. Тимәк, башҡорттарҙың һынлы сәнғәт оҫталары яулайһы үрҙәр алда әле.

**Азамат ТАЖЕТДИНОВ,**
Сибай ҡалаһы.



**Бесәнселәр**

БАҘАР

**Рәсәйҙәге демографик хәлдең ҡырҡыулығы ситтән килеүселәргә айырым иғтибар бүлеүҙе талап итә. Хәҙер илебеҙ чиновниктары һәм ғалимдары, иҡтисадыбыҙ емерелмәһен өсөн мигранттарҙың һаны ҡайһы өлкәлә күпме булырға тейеш, тигән мәсьәлә өҫтөндә көнө-төнө баш вата.**

# Килмешәктәр баҙарҙа,

## хаҡтар арта тауарға...

Ниһәйәт, түбән сифатлы грузин һәм молдован шараптарының беҙгә йылға булып ағылыуынан ҡотола алдыҡ. Хәҙер инде икенсе бер мәсьәләне хәл итергә ҡалды, йәғни баҙарҙарҙа эшләүсе килмешәктәрҙең һаны тәүге осорҙа 40 проценттан артмаҫҡа, улар яйлап баҙарҙа кәмей барырға тейеш.

"БАШвестЪ" сайты үткәргән анкетала һорауҙарға яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө - "Мигранттар Рәсәй граждандарының эш урынын яулай һәм етештереүселәргә үҙ шарттарын ҡуя", дүрттән бер өлөшө - "Уларҙың урынына урындағы халыҡ килеп, легаль рәүештә эшләй алырмы икән?", тағы ла шунсамаһы - "Хеҙмәт миграцияһы мәсьәләләре был юл менән хәл ителмәй", тип белдергән. Анкета һорауҙарына яуап биреүсе һәр унынсы кеше генә "Аралашсы булмағанда ғына аҙыҡ-түлеккә һәм әйберҙәргә хаҡ түбәнәйәсәк" тип иҫәпләй.

Үткән йылдың ноябрендә Рәсәй халҡының 75 проценты баҙарҙарҙан килмешәктәрҙе ҡыуыу сәйәсәтен хуплаһа, 2007 йылдың ғинуарында үндайҙарҙың һаны 7 процентҡа кәмегән. Хәҙер инде ситтән килеүселәр яңы шарттарға ҡулайлашып, реклама гәзиттәренә "Рәсәй граждандығы һәм урындағы пропискаһы булғандарҙы эшкә алабыҙ", тигән иғлан бирә башланы.

Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, граждандарҙың 37 проценты баҙарҙарҙа килмешәктәр мәсьәләһен хәл итеү буйынса бер ниндәй ҙә үҙгәреш һиҙелмәй, тик дүрттән бере генә үҙгәреш бар, тип иҫәпләй. Рәсәй халҡының 18 проценты иһә, киреһенсә, баҙарҙарҙа килмешәктәрҙең һаны артты, тип яуап биргән. Анкетала ҡатнашыусыларҙың 50 проценты "Баҙарҙарҙан килмешәктәрҙе сығарыу тауар хаҡын төшөрмәйәсәк", тигән фекер яҡлы.

**Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Өфөләге сауҙа системаһында килмешәктәр элек тә, хәҙер ҙә 4 проценттан артмаған икән. Беҙҙәге вьетнам һәм ҡытай баҙарҙары хәҙер инде ҡумәртәләп һатыу системаһына күсә, уларға урындағы халыҡ вәкилдәре эшкә алына. Тик был хәл беҙҙең иҡтисадты күтәрергә нисек булышлыҡ итәлер инде, быныһын әйтеүе ҡыйын.**

**Денис БОРОДИН.**
**"БАШвестЪ".**

# Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

## Белмәһәң-бел



### Бөйөк Ҡытай стенаһы

Беҙҙең эраға тиклем III быуат баштарында Ҡытайҙың беренсе императоры Цинь Шихуанди, үҙ дәүләтен төньяҡ дошмандан ҡурсалау маҡсатында, ҡәлғә стенаһы төҙөргә ҡарар итә. Әммә уға тиклем дә Ҡытайҙың төньяғындағы ваҡ батшалыҡтарҙың хакимдары урыны-урыны менән стена төҙөгән. Император Цинь уларҙы тағы ла бейегерәк стеналар һалдырып, тоташтырып сығырға уйлай һәм маҡсатына ирешә. Шулай итеп, оҙонлоғо 6 мең километрға һуҙылған Бөйөк Ҡытай стенаһы һалына. Стенаны 25 мең һағауыл башнялары нығытып тора.




Дошманға ҡаршы торор өсөн төҙөлгән Бөйөк Ҡытай стенаһы Ер шарындағы иң оҙон ҡоролма һанала. Ун йыл эсендә төҙөлөп бөткән был стенаны һалыу өсөн йөҙләп кешене эшкә ҡыуғандар һәм уларҙың яртыһынан күберәге ауыр эшкә сыҙай алмай үлгән. Эшселәрҙе бөтөн ауылдар буйлап ҡурҡытып алып китер булғандар. Шуға Бөйөк Ҡытай стенаһын донъялағы Иң оҙон ҡәберлек, Күҙ йәштәре стенаһы, тип тә атайҙар. Ләкин стена төҙөү эше ни тиклем генә ғазаплы булмаһын, ҡытайҙар үҙҙәренең "Бер быуындың һәләк булыуы, киләсәктә бик күп быуындарҙы ҡотҡара", тигән мәҡәлен онотмай.

Ун ике метр бейеклегендәге күҙәтеү башнялары ла беҙҙең көндәргәсә һаҡлана. Стенаны күпме генә нығытып тормаһындар, 1211 йылда Сыңғыҙхан Ҡытайҙы баҫып алыуға өлгәшә...

Кем Бөйөк Ҡытай стенаһына аяҡ баҫмаған, шул Ҡытайҙы күрмәгән, тигән әйтем дә бар. Йыл һайын стенаны күрер өсөн килгән миллиондан ашыу турист өсөн был һүҙҙәр девизға әүерелә. Космонавтарҙың йыһан бейеклегенән стенаны оптик приборҙарһыҙ ҙа күреүе был боронғо ҡоролманың ни тиклем бөйөк мөғжизә булыуын дәлилләй.

**✓ Сөннәтһеҙҙән икмәк телдермәйҙәр, мал салдырмайҙар, мәрхүмдәрҙе йыуыуҙан да мәхрүм сөннәтһеҙҙәр. Ниңәлер, уларҙың ҡулы менән башҡарылған ғәмәлде "хәрәм" тип баһалау йәшәй беҙҙең яҡта.**



ӘЙТӘГҮР!

**Ярты донъяны яулаған Наполеон Бонапарттың "Үҙ армияңды туйындырмаһаң, кешенекен туйындырырһың", тигән һүҙҙәре бар. Уның менән килешеп тә була, ләкин илдең көс-ҡеүәте бөгөн армияның көсөнә генә ҡайтып ҡаламы икән? Егеттәргә хәрби хеҙмәткә барыу кәрәкме? Ошо һорауҙар менән беҙ йәштәргә мөрәжәғәт иттек.**

# Ниндәй армия кәрәк?

## Ғөмүмән, кәрәкме ул?

● **Айнур ГАЛИН, студент:** Мотлаҡ хәрби хеҙмәтте һаҡлап ҡалыу яғындамын. Бөгөн донъя хәлен белеп булмай, Иракта һуғыш ҡыҙғандан-ҡыҙа, мосолман-христиан араһын бутарға ғына торалар. Йоҙроҡ болғап, ядро ҡоралы менән кемдәлер ҡурҡытырға маташыу ярҙам итмәйәсәк. Хәүеф ил эсендә, замана һуғышы йыш ҡына терроризм аша бара. Бар йәмғиәт армияның мөһимлеген аңларға, уның көсөн арттырыу хаҡында уйларға тейеш. Рәсәйҙең файҙаланылмай ятҡан икһеҙ-сикһеҙ байлыҡтарына ымһыныусылар һәр саҡ күп булды, хәҙер иһә дошман беҙҙе тирә-яҡлап уратып алған, асыҡтан асыҡ көс ҡулланыуға бармаһа ла, теге йәки был төбәктәге низағты (мәҫәлән, Чечнялағы кеүек) үҙенсә файҙаланырға тырышасаҡтар. Армияңды туйындырмаһаң, тимәк, тыныслыҡ менән хушлашырға тура килер.

● **Ғәлим ВӘЛИЕВ, эшҡыуар:** Дәүләт булғанда, армия һәр саҡ буласаҡ. Тик ул ниндәй булырға тейеш һуң? Әрме хеҙмәтен ҡайһы бер хәрби чиндар сәйәси йоғонтоно һаҡлау өсөн генә файҙалана.

Профессиональ армия, тибеҙ, әммә уны күҙ алдына баҫтырыусылар һирәк. Рәсәй йәки Ҡытай кеүек, кәмселектәре күп миллионлаған һалдатлы армиялар тотоу аҡсаны елгә осороу ғына. Хәрәкәтсән, аҙ һанлы, әммә ҙур көскә эйә ҡоралы көстәр кәрәк, юҡһа, Чечняла күпме мәсхәрәләнде "бөйөк" армиябыҙ. Баҙар заманындағы һәр тауар кеүек, армия хеҙмәт емеше генә түгел, ул тауар кеүек сифатлы, бөтә талаптарға ла яуап бирергә тейеш. Армияны ил менән бергә үҫтерергә, яңы техника менән тулыландырырға кәрәк.

● **Гүзәл НУРҒӘЛИНА, уҡытыусы:** Иле ниндәй, армияһы ла шундай, тигәндәй, ҡоралы көстәрҙең хәле зәңгәр экрандарҙа көн һайын һөйләнгәндән күпкә айырыла, тиер инем. Яңы танк йәки самолет уйлап табалар, хәрбиҙәргә фатир бирәләр, ә икенсе яҡта йәш кенә һалдат Сычевты туҡмап имгәтәләр. Тегендә аҫылыналар, бында аталар, иғлан ителмәгән һуғыш бара, тип уйларһың. Егеттәрҙең күбеһенең армиянан нисек тә булһа ҡалырға тырышыуын аңларға мөмкин.

Армия йәмғиәт күләгәһе ул. "Бабайсылыҡ" та халыҡтың менталлегендә. Шулай ҙа беҙ уның хәрби көстәрҙәге сағылышынан ҡотола алабыҙ. Әммә гауптвахталар менән түгел.

● **Зәлифә ДАЯНОВА, һатыусы:** Элегерәк әрме хеҙмәтенә бармаған егеттәргә ҡыҙҙар ҡарамай торғайны. Хәҙер уңдайҙар аҙым һайын. Минеңсә, армия "тормош мәктәбе" ул. Уны үткән йәш кеше сыҙамлы, һынауҙарға бирешеп бармай. Ихтыярлы, ғаиләһен ҡарай алырлыҡ, ысын атай булырлыҡ ир-ат һирәк бөгөн. Спорт менән шөғөлләнмәгән, һаулыҡтары ҡаҡшаған егеттәребеҙ күп. Хәйер армияла ла шул уҡ хәл инде, совет осорондағы кимәлдә һаҡлап ҡала алманыҡ. Тик иң яҡшы патриотик тәрбиәне иле хаҡында артыҡ хәүефләнеп бармаған йәштәргә армиянан башҡа нәмә бирһен?

**Айгиз ЮЛДАШБАЕВ** яҙып алды.

# "ҠУЯН АТ, ҺЫРЛЫ САНА",

## йәки Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама...



### Ғәмәлдең фарызы

Сөннәт ғәмәле хаҡында ғилми, дини сығанаҡтарҙа төрлөсә аңлатмалар йөрөй. Йәһүдтәр өсөн, мәҫәлән, ҡан төшенсәһе йән тигәнде лә аңлата. Шуға күрә ғүмерҙе барлыҡҡа килтереүсе ағзаның тиресәһен ҡырҡҡан сакта ҡан ағыҙыу кешене яралтҡан Аллаһы Тәғәләгә үҙ ғүмереңде бағышлауға тиңләнә. Ислам дине буйынса, Ибраһим бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләнең талабы буйынса үҙ-үҙен, улы Исмәғилде һәм барлыҡ хеҙмәтселәрен сөннәтләй. Икенсе бер риүәйәт буйынса, Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәскәре изге яу мәлендә оҙаҡ ваҡытҡа дошман ҡамауында тороп ҡала. Эҫелә һыуһыҙ интеккән яугирҙәрҙең енси ағзалары боҙола башлай. Бәйғәмбәр яугирҙәренә үҙ-үҙҙәрен сөннәтләргә ҡуша һәм был юл менән улар һәләкәттән ҡотола. Мөхәммәт бәйғәмбәр игеҙәк ейәндәрен дә тыуыуҙарының етенсе көнөндә сөннәтләй. Мосолмандарҙың сөннәтлеләргә ингән өлөшө "суниттар"("сөннәттәр"), сөннәтһеҙҙәре "шеиттар" ("шәһит-тәр") тип атала. Бөгөн был ике төркөм араһында иғлан ителмәгән һуғыш бара һәм мосолмандар араһындағы был ҡапма-ҡаршылыҡты НАТО кеүек көстәр үҙ файҙаһына бик оҫта ҡуллана.

Хәҙерге христиан динендә сөннәтләү юҡ, әммә Иисус Христосты ла (Ғайса бәйғәмбәрҙе) тыуыуының һигеҙенсе көнөндә сөннәтләгәндәр. Һуңынан христиан динендә иң күп реформа яһаусы Павел апостол сөннәтләүҙе суҡындырыу ғәмәле менән алмаштыра. Сөннәтләү XX быуаттың 70-се йылдарында Көнбайышҡа, атап әйткәндә, Америкаға ла тарала. Ул саҡта яңы тыуған барлыҡ ир-аттарҙың 80 проценты сөннәтләнә. Ә Ер шарында бөгөн барлығы 60 процент көслө зат ағзаһы сөннәтле булып иҫәпләнә. Сөннәт мәсьәләһенә яҡыныраҡ килеп, уның кеше һаулығы өсөн файҙаһы, әһәмиәте хаҡында тәрәндәнерәк фекер йөрөтәйек әле.

### "Бабаға ултырҙыҡ..."

Ул көнгә тиклем сөннәтләнгән ағайҙарҙың ыштанһыҙ көйгә оҙон ҡулдаҡ кейеп, аяҡтарын кирә баҫып, ауыл урамында төлкән-төлкән атлап йөрөгәнен күреп, үҙҙәрен "баба-баба" тип үсекләп, көлә торғайнык. Әммә, көлә килә, артынан һәрә килә, тигәндәй, бер көн килеп, сират беҙгә лә етте. Йәй башының матур бер көнөндә "Ауылға баба килгән", тигән һүҙ таралғас, беҙҙең, 4-5 йәш араһындағы тиҫтерҙәрҙең, йөрәге жыу итеп ҡалды. Йылғырыраҡ, зирәгерәк малайҙар ауыл янындағы урманға ҡасып өлгөрҙө. Улар баба өйҙән-өйгә йөрөп, үҙ эшен бөтөргәндән һуң ғына, кисләтеп кенә өйҙәренә ҡайта алды. Ҡайһылары йыл һайын ауылға килгән бабанан ҡаса торғас, бөтөнләй сөннәтһеҙ тороп ҡалды. Бер нисә йылдан сөннәтсе бабаның үлеп ҡалыуы хаҡында ишеттек һәм беҙҙән һуң донъяға килгән бер нисә быуын малайҙары сөннәтһеҙ ҡалды, уның ни икәнен дә белмәй үҫте.

Ә беҙ эләктек. Һаман да иҫемдә. Баба тигән кешенең беҙҙең өйгә килеп ингәне, мине сәсемдән һыйпағаны, "Көҙ кенә улыма ҡуян ат, һырлы сана алып киләм, егеп йөрөрһең", тип әйткәне. Бигерәк хикмәтле, серле, әкиәттәгесә тылсымлы ине шул бабаның "ҡуян ат, һырлы сана", тигәне. Уның "ҡуян ат" тигәнен аңланым да кеүек, ә бына "һырлы сана" тигәне нисегерәк икән? Шул хаҡта хыялланып та өлгөрмәнем... "сем!"итеп ҡалды. Уның ҡарауы, "ҡуян ат, һырлы сана" хаҡындағы татлы хыял барыһынан да көслөрәк булып сыҡты. Һәр хәлдә, ул саҡтағы ауыртыныу татлы иҫтәлек кенә булып хәтергә уйылған. "Ҡуян ат, һырлы сана" тигәндең хикмәте лә тап ошондалыр, күрәһең. Тағы ла шуныһы иҫтә ҡалған: сөннәтсе баба енси ағзаны ҡырҡҡандан һуң хасил булған сей яраға сөрөк, йәғни серегән ағас онон һибә торғайны. Хәҙерге профессиональ медицина күҙлегенән ҡарағанда, сөрөк, бәлки, сәйерерәк тә, ҡырағайыраҡ та булып күренәләр, әммә беҙҙең ауылда, мәҫәлән, бер малайҙың да яраһы боҙолоп, ауырып йөрөгәне булманы.

Оҙон ҡулдаҡ кейеп, урам буйлап төлкән-төлкән баҫып, беҙ ҙә йөрөнөк, беҙҙән дә "баба-баба" тип көлдөләр. Тик үҫә килә, шуға ла иғтибар иттек: өлкәндәр, ниңәлер, сөннәткә ултырмағандарға күп кенә яуаплы эштәрҙе ышанып тапшыра, ниңәлер сөннәтһеҙ кешегә ҡулы йыуылмаған кешегә ҡараған һымаҡ ҡарай. Сөннәтһеҙҙән икмәк телдермәйҙәр, мал салдырмайҙар, мәрхүмдәрҙе йыуыуҙан да мәхрүм сөннәтһеҙҙәр. Ниңәлер, уларҙың ҡулы менән башҡарылған ғәмәлде "хәрәм" тип баһалау йәшәй беҙҙең яҡта. "Сөннәтһеҙҙән кәңәш һорама!" тип тә әйтәләр хатта. Тағы ла, ниңәлер беҙҙә сөннәтләүҙе "бабаға ултырыу" тип атайҙар. Ниңә ултырыу икән? Йәһүдтәрҙә сөннәтләү "бритмила" тип атала икән. Уларҙа "Ысын ир 23 февраль көнө сөннәтләнергә тейеш", тигән әйтем дә бар. Фәнни телдә сөннәтләүҙе циркумцизия тиҙәр.

### Атайҙар донъяһына күсеү

Сөннәтләү дини йолаға ғына бәйле ғәмәлме? Хәҙерге заман медицина һәм психология фәндәре күптән инде был ғәмәлдең кеше һаулығы өсөн бихисап файҙалы яҡтарын иҫбат итте. Бөгөн сөннәтләү ҡайһы бер сирҙәргә ҡаршы дауалау сараһы ла булып тора. Уның гигиена йәһәтенән әһәмиәте лә баһалап бөткөһөҙ ҙур. Хәҙер дауахаларҙа хирургтар ата-әсәләрҙең мөрәжәғәте буйынса малайҙарҙы "бабаға ултырта". Был операция бик еңел башҡарыла һәм "һырлы сана егелгән ҡуян ат"ҡа атланған малай шундуҡ өйөнә ҡайтарыла. "Бабаға ултырыу"ҙың хаҡы ла төрлө урында төрлөсә: бер меңдән өс меңгә тиклем, тиҙәр.

Медиктар һәм психологтар фекеренсә, сөннәтләү бер нисә әһәмиәткә эйә:

1.Сөннәтләү енси акт оҙайлығын, тимәк секс кинәнесен тәьмин итеүсе ғәмәл булып иҫәпләнә. Ни өсөн шулай тиһегеҙме? Сөнки енси ағзаның сөннәтләгәндән һуң асыҡ ҡалған баш өлөшө эске кейемгә ышҡылып йөрөп, уның һиҙгерлеген, тойоу һәләтен кәметә һәм был үҙ нәүбәтендә енси актты оҙайта.

2.Сөннәтләнгән һәм даими тәһәрәтләнгән ир-аттың енси ағзаһына инфекция һәм бысраҡ эләгеү ҡурҡынысы юҡ тиерлек.

3.Сөннәтһеҙ ир-аттарҙа "икенсе йөрәк сире" - енси биҙ ауырыуы (простатит, аденома) йышыраҡ осрай. Сөннәтһеҙ ир-ат сөннәтлеһенә ҡарағанда герпес, гонорея менән ике тапҡыр, сифилис, бәшмәк ауырыуы менән биш тапҡыр йышыраҡ ауырый.

4.Сөннәтләү ир-ат енси ағзаһының яман шеш менән сирләү ҡурҡынысын күпкә кәметә. Сөннәтле ир-аттарҙың ҡатындары аналыҡ юлы яман шеш сире менән һирәк ауырый. Бар ирҙәр ҙә сөннәтләнгән Сәғүд Ғәрәбстанында, мәҫәлән, ҡыҙ-ҡатындар енси ағзаларҙың яман шеш ауырыуы менән бөтөнләй яфаланмай.

5.Ер шарындағы ирҙәрҙең яртыһынан күбеһе фимоз һәм парафимоз менән яфалана. Сөннәтләү был сирҙәрҙән арыныу өсөн иң ҡулай сара булып тора. Шулай уҡ төндә бәүеле тотмаған ир-атҡа ла сөннәтләү ныҡ ярҙам итә.

6.Психологтар фекеренсә, сөннәтләнгән ир-аттарҙа ҡурҡыу синдромы аҙ була. Йәғни малай саҡта енси ағзаһының йоҡаҡ тиресәһе ҡырҡылған саҡта барлыҡҡа килгән ауыртыныу тойғоһо ир-ат өсөн, ғөмүмән, ауыртыныуға "сирҡаныс алыу" ғына икән дә.

7.Сөннәтләнгән ир-аттың енси ағзаһы эстетик йәһәттән дә оло әһәмиәткә эйә. Йолалар һәм традициялар нигеҙендә тәрбиәләнгән ир-ат өсөн сөннәт - күркәмлек билдәһе.

8.Австрия психоаналитигы Зигмунд Фрейд фекеренсә, "сөннәтләү үсмерҙе бисексуаль хәленән тиҙерәк сығарыу өсөн булышлыҡ итә". "Сөннәтләнгән малай, ир-ат атамаһы алып, әсәһе ҡуйынынан атайҙар донъяһына күсә", тиҙәр көнсығыштың аҡыл эйәләре.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡуян атҡа сырлы саналар егеп йөрөүҙең ана ниндәй әһәмиәте бар икән дә. Хәҙер уйлап ҡараһаң, ауылыбыҙға килеп, малайҙарҙы сөннәтләп йөрөүсе бабаларҙың ниндәй мөһим һәм зарури ғәмәл башҡарып йөрөгәндәрен аңлайһың. Барыһы ла илдең һәм милләттең һаулығы өсөн булған. Малай саҡта бабанан урманға ҡасып китеп, сөннәтһеҙ ҡалған малайҙар хәҙер аңлайҙармы икән үҙҙәренең ниҙән мәхрүм булғанын? Әйткәндәй, беҙҙең яҡта бер ағай өйләнер алдынан "бабаға ултырҙы". Ҡуян ат егелгән сырлы санала ултырып елеүсе 4-5 йәшлек малайҙарҙы күҙ алдына килтерһәң, донъя яҡтырып китә, күңелдә мөғжизәле әкиәт ярала...**

**✓ *Ирҙәр һаулығын һаҡлау буйынса үткәрелгән Бөтә Рәсәй конференцияһында ҡатнашҡан белгестәр, тиҙҙән ирҙәрҙең нәҫел арттырыу буйынса ла хәжәте бөтәсәге тураһында хәбәр итте. Был көлкө түгел.***

*ЙӘН АУАЗЫ*

# ТҮЛҺЕҘЛЕКТӘ...
## ирҙәр ҙә ғәйепле

**Тоталитар социализмдан демократик йәмғиәткә күсеү Рәсәйҙә ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы кәмеүенә алып килде. Ирҙәр был йүнәлештә рекорд ҡуйҙы. Реформалар осоронда ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы 58 йәшкә тиклем түбәнәйҙе. Ҡытай менән сағыштырғанда, айырма - 10 йыл. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың ғүмер оҙайлығы ирҙәрҙән 14 йәшкә күберәк. Бөгөн йәмғиәттебеҙҙә ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар араһында тигеҙлек булһын өсөн 6 миллион ир "етмәй".**

Быныӊ төп сәбәбе, әлбиттә, ирҙәр араһында үлем һанының артыуына бәйле. Рәсәй ғалимдарының тикшеренеүҙәре быға тиклем күҙгә эленмәгән "яңылыҡтар" асты. Баҡтиһәң, ирҙәрҙең күберәк үлеүе тормоштоң етеш булыу-булмауына түгел, ә белем кимәленең түбән булыуына бәйле икән. Эшһеҙ ҡалыу ир кеше өсөн артыҡ фажиға түгел, ә бына ҡатыны менән айырылышҡан ир өсөн йәшәү мәғәнәһе юғала. Эшһеҙ ҡалған ир нисек тә булһа йәшәй, ә бына айырылышҡан ир упҡынға тәгәрәй. Шәмбе көнө байрамынан һәм дүшәмбе бахмурынан үлгәндәр һаны арта - иҫерек килеш йә бахмурҙан үлә күпселек ирҙәр. Әгәр ҙә ошолай дауам итһә, бөгөн тыуған малайҙарҙың яртыһы ғына пенсия йәшенә етәсәк, сөнки бөгөнгө йәмғиәт малайҙарҙың һаулығына бөтөнләй иғтибар итмәй. Үҫмер йәшендәге ир заттарының типик портреты бөгөнгө көндә ошондай: уларҙың һәр икеһенең береһе тәмәке тарта, 15 проценты наркотик ҡулланып ҡараған, 95 проценты (!) 14 йәшенә тиклем иҫерткес эсемлектән ауыҙ иткән. Был ғына аҙ - бөгөн наркодиспансерҙа иҫәптә... 10 йәшлектәрҙе осратырға була!



Тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы арҡаһында ағыуланыу тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Ҙур ҡалаларҙағы балалар ата-әсәнең иғтибарына ғына мохтаж түгел, һаулыҡ һаҡлау ойошмалары ла уларҙы күҙ уңында тота алмай. Уртаса алғанда, ете йәштән башлап, малайҙар, йәғни буласаҡ ирҙәр, үҙ ҡарамағына ҡала: әсәһе элеккеләй иркәләп йыуындырмай, атайҙар ҙа буласаҡ иргә ирҙәрсә мәғлүмәт бирмәй. Уны ир-бала үҙенән ҙурыраҡтарҙан ала һәм, ҡағиҙә булараҡ, боҙоҡлоҡҡа өйрәнә. Тимәк, кешелек затын арттырыусы буласаҡ ирҙәр кире йоғонто алып үҫә. 15 йәшкә тиклемге үҫмерҙәр енси бәйләнешкә инеп өлгөрә. Быныӊ төп сәбәпсеһе, әлбиттә, телевидение аша тәртипһеҙ рәүештә күрһәтелгән һәм магазиндарҙа һатылған порнографик фильмдар. Нисек теләй, шулай йәшәгән егеттәр табиб тикшереүе өсөн ыштандарын тәүге тапҡыр военкомат саҡырыуы буйынса ирлек йәшенә еткәс кенә сисә. Ҡыҙғаныcҡа ҡаршы, күп осраҡта һуң булып сыға - егеттәрҙе күпкә алдараҡ тикшерергә һәм дауаларға кәрәк булған да бит... Ирҙәрҙең кәрһеҙ булыуы, бала булмау арҡаһында ғаиләләрҙең тарҡалыуы шуның һөҙөмтәһе. Ғаилә тарҡалыуҙың йөҙҙән ҡырҡ осрағында ирҙәр ғәйепле, сөнки бөгөнгө йәмғиәттә ирҙәрҙең бәҫе төштө. Ҡатындар матди яҡтан ирҙәргә бәйле түгел. Ирҙәргә көслө затҡа, атайға, ғаилә башлығына ҡараған кеүек ҡарамайҙар хәҙер. Яйлап-яйлап ирҙәр урынын ҡатындар яулай: президенттар губернаторҙар, ҡала башлыҡтары алмашына. Ҡыҙҙар һалдат кейеме кейә, бокс, ауыр атлетика буйынса ҡатын-ҡыҙ чемпиондар бар, футбол майҙанында трусиклы ҡыҙҙар туп тибә. Ярай әле, ҡыҫҡа итәкле ҡыҙҙар юл ситен һаҡлап, аҡса эшләгән юлдарға асфальтты ситтән килгән мыйыҡлы ирҙәр түшәй. Донъялағы иң боронғо һөнәр хужабикәләре булған фәхишәләр ҙә аҡсаны ирҙәр кеҫәһенән "һура".

Ирҙәр һаулығын һаҡлау буйынса үткәрелгән Бөтә Рәсәй конференцияһында ҡатнашҡан белгестәр, тиҙҙән ирҙәрҙең нәҫел арттырыу буйынса ла хәжәте бөтәсәге тураһында хәбәр итте. Был көлкө түгел. Миҫалдармы? Рәхим итегеҙ: бөгөн бай ҡатындар яһалма аталандырыуҙы бер ҙә әҙәпһеҙлек һанамай. Буласаҡ баланың "атаһының" ете быуынын тикшереп, улар шул рәүешле СПИД кеүек ауырыуҙан, башҡа төрлө етешһеҙлектәрҙән һаҡланырға уйлай. Баланы ла улар үҙҙәре тапмай, суррогат әсәйҙәрҙе яллайҙар. Ҡиммәткә төшә бындай шөғөл. Тик ҡатындарға түгел, ә ир заттарына. Сөнки ирҙәрҙең бер кәрәге лә юҡ, улар - буш урын. Ҡыҙ-ҡатындар тик ҡыҙ табыуҙы ғына маҡсат итеп ҡуйһа, ирҙәр бөтөнләй кәрәкмәй булып сыға түгелме? Тапҡан хәлдә лә, улар йә олимпиада чемпионын, йә Нобель премияһы алғандайҙы табырға тырышасаҡ һәм шундай нәҫел биреүсе донорҙы хуп күрәсәк. Эскән-тартҡан, эш хаҡы алмаған ир кемгә хәжәт.

Швецияла игеҙәктәрҙең күп булыуына аптырай ҡай берәүҙәр. Был берҙә генә лә швед ирҙәренең енси яҡтан көслө булыуына бәйле түгел. Был - экстракорпораль аталандырыуҙың һөҙөмтәһе. Эш шунан ғибәрәт: пробиркала, ул был хәл булһа тип, бер нисә түл күҙәнәген үҫтерәләр ҙә, әсә ҡарынында шуларҙың икәүһен ҡалдыралар. Ике тапҡыр бала табып ыҙалағансы, ике баланы бер юлы таба швед ҡатыны. Боронғоса "бала яһау ысулы", шулай итеп, бөгөн үк юҡҡа сыға бара. Был хәл иҡтисади яҡтан үҫешкән илдәрҙә генә түгел, беҙҙә лә күҙәтелә. Рәсәй ҡатындары ла ирһеҙ йәшәүҙе һәм баланы "үҙе өсөн генә" табыуҙы хуп күрә. Ошо юҫыҡта фекер йөрөткәндә, "Сәләмәтлек" милли проектына ярашлы, "әсәлек капиталы" туплау хафаға һала. Франция тәжрибәһе быныӊ ыңғай һөҙөмтә бирмәүен күптән иҫбат итте инде. Улар, мәҫәлән, икенсе донъя һуғышынан һуң бала ҡараған ҡатындарҙың пособиеһын эшләүсе ҡатындарҙың эш хаҡы менән тигеҙләне. Һөҙөмтәлә, ҡатындар ирҙәргә мохтажлыҡ кисермәй башланы.

Иң ҡурҡыныс мәғлүмәт: һуңғы йылдарҙа ирҙәрҙең ата енес күҙәнәге (сперматозоид) миҡдары ун тапҡырға кәмегән! Тәбиғәт ирҙәргә ҡарата иғтибар кәмеүгә ошо рәүешле яуап бирҙе - ирҙәр генә кәмемәй, һау ирҙәрҙең дә ата енес күҙәнәктәре кәмей. Башҡа илдәрҙәге кеүек, беҙҙә лә демографик ситуацияға ҡаршы әҙмәәҙлекле сәйәсәт алып барылмай. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаулығын һаҡлауға иғтибар артҡан һайын, малайҙарҙың - буласаҡ ирҙәрҙең һаулығын ҡайғыртыусы андрологик хеҙмәт саҡ барлыҡҡа килә башланы. Мәҫәлән, Свердловск өлкәһендә "Ирҙәрҙең урологик һаулығы" программаһы ҡабул ителгән. ( Урология енес-бәүел ағзаларының сирҙәрен өйрәнә). Башҡортостанда ла был проблемаға күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Буласаҡ атайҙар тулы медицина тикшереүе үтергә һәм, кәрәк осраҡта, дауаланырға тейеш. Уҡыу йорттарында атайҙар өсөн махсус курстар ойоштороу ҙа көнүҙәк мәсьәлә. Был ирҙәрҙе һаҡлау менән бер рәттән, милләтте лә демографик көрсөктән алып сығыуға булышлыҡ итәсәк.

**Венер СӘХӘҮЕТДИНОВ,**

**БР Дәүләт Йыйылышы-**

**Ҡоролтай депутаты.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡоролтай депутаты үтә лә мөһим мәсьәлә күтәрә. Беҙ ирҙәрҙе көслө зат булараҡ, гел маҡтауға ғына лайыҡ тип ҡарап, уларҙың проблемаларына күҙ йоморға тырышабыҙ. Был турала һөйләргә ирҙәр баҙнат итмәй, ҡатын-ҡыҙҙарҙың иһә үҙ туҡһаны - туҡһан. Амазонкалар тураһында бөтәбеҙ ҙә ишеткәнебеҙ бар. Гел ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған ҡәбиләләр берәүҙәрҙә йылмайыу уята, икенселәрҙе хафаға һала. Күрәһең, йылмайғандар бөгөнгө көн менән йәшәй, хафаланғандар мәсьәләнең ни тиклем тәрәнгә китеп барыуын күңеле менән аңлай, һиҙә. Кеше тәбиғәте бит ул шундай нескә: бөгөнгө ысынбарлыҡ иртәгә икенсе ысынбарлыҡ менән алмашынасаҡ һәм иртәнге көндө уйламаһаҡ, тәбиғәткә ҡаршы барһаҡ, киләсәктә буласаҡ ысынбарлыҡ бөгөнгө көнгә тиҙерәк емереп килеп инәсәк. Ысынлап та, беҙ уйлағанса, бөгөнгө көн кисәге көндән килмәй, ә иртәнән һуңғы көндән, йәғни киләсәктән килә.**

*ӘЙТӘГҮР!*

**"Атайымды нығыраҡ яраттым" , "Атайым миңә һәр саҡ өлгө булып торҙо" , "Атайыма ғына оҡшаған тормош иптәше һайланым"... Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәндә йыш ҡына уларҙың асылын аңлау теләге тыуа. Был матур һүҙҙәрҙе балалар күңеленә әсәйҙәрҙең, өләсәйҙәрҙең тәрән аҡылы, аҡыллы тормош тәжрибәһе һеңдермәй микән? Атайҙы яратыу, уға һоҡланыу, уның менән ғорурланыу әсәйебеҙҙән килһә, киләсәктә хәләл ефетебеҙҙе балалар атаһы итеп данлау беҙҙең бурысҡа күсә. Был фекер ысынлап та шулаймы, әллә бәхәсләшергә урын бармы? Түбәндәге миҫалдар ярҙамында был һорауға яуапты бергәләп төҫмөрләп ҡарайыҡ.**

# Көслөләрҙе...
## көсһөҙ зат күтәрә

**Гөлсибәр ӘМИНЕВА, уҡытыусы:**

- Мин бала саҡта атайымды барыһынан да нығыраҡ яраттым. Ул беҙҙе иркәләп-һөйөп, яратып ҡына үҫтерҙе. Әсәйем йыш ҡына ҡунаҡтар саҡыра ине. Атайыбыҙҙың эскән мәлдәре лә булды, әммә беҙҙе ҡыйырһытҡанын хәтерләмәйем. Әсәйемә лә, туғандарыбыҙға ла бик иғтибарлы ине. Ир идеалын атайымда күреп, йәшләй генә бер сибәр егеткә тормошҡа сыҡтым. Яратышып өйләндек. Ул эсергә яратты. Миңә ҡул күтәрҙе. Йәберләүен балаларға күрһәтмәҫкә тырыштым. Киреһенсә, "Атайығыҙ һәйбәт, уны тыңлайыҡ", тип ихтирам белдереп торҙом. Тик уларҙың күҙ алдында кәмһетелә башлағас, бөтәнсә алдашманым. Балаларҙы ла ыҙалатты, һуҡты, рәнйетте. Үҙе атайһыҙ үҫкәнгәме, ярата белмәне ул балаларҙы. Атай наҙы урынына ғаиләлә ҡырыҫлыҡ хөкөм һөрҙө. Етем үҫмәһендәр, атайлы булһындар, тип араларында һөйөү тәрбиәләргә тырышыуым да бушҡа булды. Һөҙөмтәлә, атай кешегә нәфрәт тойғоһо, һалҡынлыҡ ҡына барлыҡҡа килгән. Тик һәр нәмәнең ике осо, ыңғай һәм кире яғы була. Беҙҙең миҫалдан һабаҡ алды ҡыҙҙарым, аҡыллы, кешелекле егеттәрҙе һайланы, улдарымды иһә, "Ҡатын-ҡыҙҙы рәнйетергә ярамай" , "Бала-ул һинең бәхетең" , "Ғаиләлә ихтирам булырға тейеш" тигән хәҡиҡәткә төшөндөрөп тәрбиәләнем.

**Фәүзиә ЛАТИПОВА, журналист:**

- Минең бала сағым һуғыштан һуңғы ( самалап 1957 тиклем) йылдарға тура килде. Һуғыштан ҡайтҡан яугирҙәр, айырыуса күршеләр һәм шул иҫәптән минең атайым да, ни өсөндөр, ғаиләләренә тынғылыҡ бирмәне - гел тауыш, ҡысҡырыш ишетә торғайным. Минең кескәй аңымда ир кеше һәр ваҡыт яһил зат булып ҡалды. Хатта бер ҡасан да кейәүгә сыҡмаҫҡа, тигән фекер ҙә ҡатып ҡалғайны күңелемдә. Шуғалыр ҙа, тормош ҡороp йәшкә еткәс, иремдең һәйбәт холоҡло булыуын теләнем. Теләгем тормошҡа ашты. Балаларыма "Атайығыҙ бик һәйбәт кеше" , "Атайығыҙ менән кәңәшләшәйек" , "Атайығыҙ ни әйтер?", "Атайығыҙ эштән ҡайта, матур итеп ҡаршы алайыҡ" тигәнерәк фекерҙәр еткереп, уларҙа атайҙарына ҡарата хөрмәт уятырға, уның ғаиләлә төп көс, ышаныс икәнлегенә инандырырға тырышып тәрбиәләнем.

**Гүзәл СИТДИҠОВА, БР Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары советы рәйесе:**

- Беҙҙең башҡорт атайҙары балаларына ҡырыҫыраҡ мөғәләмәлә бит инде ул. Ә шулай ҙа атайыма рәхмәтлемен. Ул беҙҙе маҡсатлы, белемгә ынтылыусан, киң ҡарашлы итеп тәрбиәләргә тырышты. Үҙе бик матур итеп һүрәттәр төшөрә ине, мәктәптә урыҫ, башҡорт, немец телдәренән уҡытты. Өйҙә китаптар күп булды. Был беҙгә, төпкөл ауылда йәшәһәк тә, мәғлүмәтле булырға ярҙам итте. Дүрт ҡыҙ, бер малай үҫтек. Ҡыҙ бала тип йәлләмәне, дүртенсе синыфта уҡ ҡулыма салғы тотторҙо. Хеҙмәткә өйрәтеп үҫтерҙе. Әммә атайым үтә ҡырыҫ булды. Донъянан китер йылында ғәфү үтенгән һымаҡ: "Атайһыҙ үҫкәс, атайҙың ниндәй булырға тейешлеген ҡайҙан белгән инде мин" , тип әйтеп һалды. Һигеҙ йәшлек сағында олатайыбыҙҙы репрессияға алып киткәндәр.

Үҙебеҙҙең ғаиләлә ирем балаларға бик йомшаҡ булды. Ул һирәк асыуланды, әммә балалар миңә ҡарағанда унан нығыраҡ ҡурҡа ине. Улыбыҙға кескәй сағынан балта тоттороп, хеҙмәткә өйрәтеп тәрбиәләне. Бер саҡ улыбыҙ кем менәндер һуғышып ҡайтып керҙе. Ни булғанын һораштылар ла: "Дөрөҫ эшләгәнһең",-тине. Күп осраҡта улымдың мин өнәп бөтмәгән ҡылыҡтарын атаһы хуплай ине. Ир кеше шулай булырға тейеш, йәнәһе. Йәғни, ир-егет ҡурҡҡанын белдерергә, нимәнәндер ҡасып китергә тейеш түгел. Мәҫәлән, коллективта уның ҡурҡҡанын белһәләр, баҫасаҡтар, тиер ине. Ирем кешеләр менән дә бик мөләйем, алтын урталыҡты һайлай белә. Ошо сифаттарын улыбыҙға ла күсерҙе.

**Шулай итеп...**

**Борон-борондан ир-ат йәмәғәтселек алдында көслө хужа, өлгөлө атай, йәғни ғаиләнең терәге, һаҡлаусыһы булараҡ танылған. Танытылған. Йәмғиәттең тотороҡлолоғон, дәүләттең көсөн ғаиләләр ныҡлығы билдәләй. Ә ғаилә усағын әсә кеше, хужабикә, ҡатын-ҡыҙ һаҡлай. Тимәк, тормошто ла гүзәл зат көсө алға әйҙәй. Ирҙе ир итеп, ирҙе атай итеп, ирҙе көслөләрҙән көслө итеп көсһөҙ зат күтәрә. Ә быныӊ өсөн ир-егеттең уны аңлауы, яратыуы, таяныс булырға тырышыуы ғына ла етә икән.**

**Светлана НАСЫРОВА яҙып алды.**

*✓Артур улым мин ваҡыт табып тотона алмай йөрөгән эшкә үҙаллы тотоноп китте. Журналистарҙың "Алйот булып күренеүҙән ҡурҡма", тигән әйтеме бар. Улыма ла һәр нәмәне энәһенән-ебенә тиклем төпсөнөп белешергә өйрәттем.*

# Йән тарта, йән тартмаһа, ҡан тарта

**Берәүҙең дә милләте маңлайына яҙылмаған. Был тәғәйенләнеш кешенең күңел төбөндә, ҡанында, хәтерендә һаҡлана. Туғанлыҡ ептәре тарих төпкөлөнән ауыҙ-тел ижады аша, йыр-моң аша шаңдау булып яңғырай, шәжәрә булып бөгөнгө көнгә килеп етә. Тыуғандан бирле башҡорт мөхитендә йәшәгәндәр үҙенең кемлеге тураһында уйланмай - ысынбарлыҡты нисек бар, шулай ҡабул итә. Көнитмешебеҙ менән ризалыҡтанмылыр, тамырҙарыбыҙҙы ла барлай һалып бармайбыҙ - туғаның эргәңдә булғанда, тамырың яҡын кеүек күренә. Ә бына Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең тын алышы нисек? Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгән осорҙа, бәлки, иң алда ситләтелгән милләттәштәребеҙ тураһында уйларға тейешбеҙҙер - ни тиһәң дә, башҡорттар Рәсәй дәүләтенә ҡушылған осорҙа бөгөнгө административ сиктәр киңерәк булған. Ырымбур өлкәһе башҡорто Салауат Хәбибулла улы ЮЛБАРЫҪОВ менән һөйләшкәндә ҡан-ҡәрҙәшлектең ни икәне төҫмөрләнә, Октябрь революцияһынан һуңғы бүленештең ситтә тороп ҡалған милләттәштәребеҙгә ниндәй йоғонто яһағаны күҙгә бәрелә.**

## БЕҘ - КИНЙӘ БАТЫР ТУҒАНДАРЫ

Мин Ырымбур ҡалаһында "Каруанһарай" нәшриәт йортонда эшләйем, төрлө авторҙарға китап сығарырға ярҙам итәм, гәзиттәргә мәҡәләләр яҙам. Ырымбур өлкәһенең Төйлөгән тигән шахтерҙар ҡасабаһында рус мәктәбен тамамлау сәбәпле, башҡортса уҡый-яҙа белмәйем, уның ҡарауы, һөйләшеп аралашам. Ғаиләлә беҙ өс малай үҫтек: Салауат, Юлай, Марс. Юлай Төйлөгәндә йәшәй, мин - Ырымбурҙа, бәләкәй мырҙабыҙ Өфөлә йәшәп, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә. Ана шул Марстың өлкән улы Артур миңә шәжәрә яҙыуҙа ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Тыуған телде насар белеүем оят: "Ә нимә ул шәжәрә?" - тип һораным. Аңлатып бирҙеләр. Марс мырҙам: "Мин архивтар буйынса ярҙам итермен", - тине. Мөхәррирлек вазифаһын мин алдым һәм шул ниәт менән Башҡортостанға килдем. Эште республика архивына барып, Юлбарыҫовтар фамилиялы кешеләр тураһында мәғлүмәт туплауҙан башланыҡ. Эҙләнә торғас, өләсәйебеҙ яғынан Нәҙершиндар, әсәйебеҙ яғынан Күҙәшевтар тамырҙарын табып тағы ла төпкәрәк төшөп эҙләй башланыҡ. Бөтәһе ете араның шәжәрәһен төҙөнөк. Әлбиттә, электән үк тамырҙарыбыҙ Кинйә Арыҫланов нәҫеленә барып тоташыуын белә инек. Әле лә беҙҙең күп туғандарыбыҙ Икенсе Кинйә-Абыҙ ауылында йәшәй. Өммөгөлсөм өләсәйебеҙ тере саҡта беҙҙе, балаларҙы, тыуған ауылына алып бара торғайны. Ул шулай ейәндәрен ауыл буйлап йөрөтөп, туғандар менән таныштырҙы. Өләсәйем һөйләүе буйынса ла, тарих дәреслектәренән дә Кинйә Арыҫланов Пугачевтың уң ҡулы булыуы тураһында хәбәрҙар инек. Был турала дәлилләмәйенсә һөйләп йөрөп булмай бит, шуға күрә архивтан шул осорға бәйле документтар табып, элекке ишетеп белгәндәрҙе факттар менән нығыттыҡ. Кинйәнең кесе туғаны Ирназарҙың бүләсәре Шәһризада беҙҙең ҡартатайҙың атаһы менән ғаилә ҡорған. Уларҙың улы Шәһәнгәрәй беҙҙең Өммөгөлсөм өләсәйебеҙҙең атаһы була. Шәжәрәбеҙҙе шулай Арыҫлановтар, Нәҙершиндар араһын ҡушып төҙөй башланыҡ. Артур улымдан башлап һанағанда, шәжәрәлә 27 быуын теркәлде. Тамырҙарыбыҙҙың Бошман-Ҡыпсаҡҡа барып тоташыуы үҙе үк ғорурлыҡ тойғоһо уята.

## ШӘЖӘРӘ ТАМЫРҘАРЫ

Бәләкәй саҡтан бирле "Мин кем, ҡайҙа минең тамырҙарым?" тигән һорау башты вата торғайны. Был турала йыш уйлана һәм һораша торғайным. Өммөгөлсөм, Фатима өләсәйҙәремә рәхмәт, улар ҡыҙыҡ итеп йыбанмай төшөндөрөп һөйләй торғайны. Боронғоно иҫкә алып, хатта илашып та ала инеләр. Әммә уларҙың һөйләгәне граждандар һуғышынан төпкә китмәй торғайны. Аллаға шөкөр, быуындан-быуынға күсеп килгән Ҡөрьән китабы һаҡланған. Уның үҙ тарихы бар. Өләсәйемдең атаһы Шәһәнгәрәй ҡарт һаҡлап алып ҡалған уны. Китаптың тәүге битенән башлап, төрлө яҙмалар яҙылған. Уның барлығын бәләкәй саҡтан белә инем. Әсәйем: "Олатайымдың ҡулында Ҡөрьән булды, унда минең яҙғандар ҙа бар", - тип, гел әйтә торғайны. Шәжәрә төҙөй башлағас, Ҡөрьәнде эҙләп таптыҡ. Шәһәнгәрәй ҡартатайым бик уҡымышлы кеше булған, ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән. Ул Ҡөрьән биттәрендә күп яҙыуҙар ҡалдырған. Мәҫәлән, "Мырҙам Сәлимгәрәй шул көндә вафат булды", тигән яҙыуы бар. Унан күрә Яҡшымбәт ауылында мәҙрәсәлә уҡып йөрөгән ҡыҙы Рәкиә лә үҙенең яҙмаларын теркәгән. Ул яҙыуҙарҙы уҡығанда күҙгә йәштәр килде,



иланым хатта. Ҡартатайым 1928 һәм 1931 йылдарҙа репрессияға эләгеп, ике йыл төрмәлә ултырып ҡайтҡас, күп тә тормай, үлеп киткән. Ҡөрьән өсөнсө ҡатыны Камила өләсәй ҡулына күскән. Ул оҙаҡ ҡына ауырып ятты. Өммөгөлсөм өләсәйем, Рәкиә инәйем уның янына барып, тәрбиәләп, ярҙам итеп йөрөгән. Камила өләсәй үлгәс, Ҡөрьән 1909 йылғы Рәкиә инәйгә күскән. Ул балаларға исем ҡушҡанда, үлгәндәргә йыназа уҡығанда, йәштәргә никах әйткәндә шул Ҡөрьәнде алып йөрөгән. Бәләкәй саҡта был ҡәҙерле китапты беҙ ҡулға алырға ояла инек. Хәҙер китап магазиндарында, һатыуҙа Ҡөрьән китаптары тулып ята, ә беҙҙең бала сағыбыҙҙа ул берҙән-бер изге китап һанала ине.

## БЕР УС БОЙҘАЙ

Ҡөрьәндә әсәйем яҙып ҡалдырған ошондай яҙыу бар: "Бөгөнгө көн иң ҡайғылы көнөм, әсәйемде төрмәгә алып киттеләр". Был яҙмаға бәйле тарих бик аяныслы. 1946 йылда Өммөгөлсөм өләсәйем һәм уның бәләкәй мырҙаһы Мәзәрик бабайымдың ҡатыны 20 йәшлек Йәмилә инәй ырҙын табағында эшләгән саҡтарында кеҫәләренә берәр ус бойҙай һалып алып ҡайтҡан. Уларҙы урлыҡта ғәйепләгәндәр. Өләсәйемдәрҙең өйөндә әсәйем баҫыуҙан йыйып алып ҡайтҡан бер тоҡ башаҡ ултырған була. Бындай һәләте өсөн әсәйемде ауыл халҡы хатта "Өммөгөлсөмдөң тауығы" тип йөрөткән. Ә Йәмилә инәйемдәрҙең өйөндә ун биш кило һуғып елгәрелгән бойҙай була. Өләсәйемдең өйөндәге башаҡтарҙы ла, инәйемдең бойҙайын да экспертизаға алып киткәндәр. Ул осорҙа бит закон ҡаты булған: өләсәйемде әлеге бер тоҡ башаҡ ҡотҡарып ҡалған, ә инәйемде ун биш йылға төрмәгә ултыртҡандар. Йәмилә инәй ул мәлдә ауырлы булған. Балаһы төрмәлә тыуған һәм өс йәшендә үлгән. Үҙе 1953 йылда Сталин үлгәндән һуң төрмәнән сыҡҡан. Ҡөрьәндә бала тыуыу, кеше үлеү кеүек мәғлүмәттәрҙән тыш, ана шундай донъяуи яҙмалар ҙа бар. Улар ҙур тойғо менән яҙылған. Мәҫәлән, 32 йәштә генә үлеп киткән әсәһенең үлеме тураһында 12 йәшлек баланың яҙғанын тетрәнмәйенсә уҡып булмай: "1921 йылдың 19 апрелендә (иҫке стиль буйынса) бала тапҡан ваҡытта беҙҙең иң һөйөклө, наҙлы, һөйкөмлө әсәйебеҙ үлде. Ул беҙгә йәшәүҙән дә ҡәҙерле ине. Елямғырҙан ҡурсалап үҫтергән 12 йәшлек Раҡыя менән ете йәшлек Өммөгөлсөм ҡыҙҙары етем ҡалды". Ғәрәп хәрефтәре менән башҡортса яҙылған һәр яҙмала тарих сағыла.

## БЕЛМӘҮ ҒӘЙЕПМЕ?

Мин бәләкәйҙән бик иҫле булдым, өләсәйҙәрҙең һөйләгәнен хәтерҙә ҡалдырырға тырыштым. Үҫә килә тарихтың һәр осоронда мөһим ваҡиғалар булғанын һәм шул ваҡиғалар солғанышында ҡайһы бер кешеләрҙең мөһим урын биләгәнен айыра башланым. Ундай ҡәҙерле кешеләр бөгөн дә маяҡ кеүек йүнәлеш биреп тора. Артур улыма ана шул мөһим ваҡиғаларҙы һәм көслө шәхестәрҙе иң тәүҙә күҙ уңында тоторға өйрәтергә тырыштым. 2001 йылда Кинйә-Абыҙ ауылында Кинйә Арыҫланов исемендәге музей асҡан ваҡытта туғандар бергә йыйылдыҡ. Өс Советтар Союзы Геройы сыҡҡан ошо бәләкәй генә 5-6 тиҫтә өйҙән торған ауылда йыйылыуыбыҙ бик мәртәбәле булды . Туғыҙ йәшлек Артур беҙҙең арала йөрөнө. Музейҙағы экспонаттар, ололарҙың һөйләүе уға шул хәтлем ныҡ тәьҫир итте - ул шунан башлап туғандарыбыҙҙың, ғөмүмән, башҡорт халҡының тарихы менән ҡыҙыҡһына башланы. Марс мырҙам миңә йыш ҡына, журналист башың менән туғандар тураһында иҫтәлектәр яҙмайһың, тип үпкә белдерә торғайны. "Башымда, хәтеремдә ул тарих күптән яҙылған", тип аҡлана торғайным. Артур улым мин ваҡыт табып тотона алмай йөрөгән эшкә үҙаллы тотоноп китте. Журналистарҙың "Алйот булып күренеүҙән ҡурҡма", тигән әйтеме бар. Улыма ла һәр нәмәне энәһенән-ебенә тиклем төпсөнөп белешергә өйрәттем. Биш йыл эсендә ул арыуыҡ материал тупланы. Былтыр беҙ, Юлбарыҫовтар, атайымдың тыуған ауылы Ауырғазы районының Өс Бәлеш ауылында йыйылдыҡ. Туғандар бергә йыйылһаҡ та ул саҡта әле шәжәрә төҙөү тураһында һүҙ булманы.

## ҠАН ТАРТЫУЫ

Ваҡыт шундай төшөнсә: ҡәҙерен белмәһәң, файҙаһыҙ юҡҡа сыға. Туғандар менән булған осрашыуҙан һуң ваҡытҡа икенсе төрлө ҡарай башланым. Йыш осрашырға форсат булмаған хәлдә лә үҙ-ара телефон аша булһа ла тығыҙыраҡ аралаша башланыҡ. Шуға инандым: һаулыҡты һаҡлау һәм туғандар менән аралашыу өсөн ваҡытты йәлләмәҫкә кәрәк. Әлбиттә, иң тәүҙә атай-әсәй өсөн ваҡыт бүлә белеүҙән башлана ул. Бөгөн минең өсөн туғандар менән аралашыуҙан да ҡәҙерле нәмә юҡ. Милләтте һәм туғанлыҡты үҙгәртеп булмай, тип бушҡа әйтмәйҙәр. Мәҫәлән, минең башҡортлоғомдо бер кем дә тартып ала алмай. Ҡан аша туғанлыҡ бик көслө тойғо. Ҡан тарта, тип бушҡа әйтелмәй. Шәжәрә төҙөгәндә ҡан тартҡан туғандарыбыҙ бер бөтөн булып күҙ алдына баҫты.

*Әҙәби башҡорт телен белмәһәм дә, элек күберәк рус телендә аралашһам да, үҙемде Башҡортостанда иркенерәк тоям. Өфө буйлап автобуста китеп барғанда егет-ҡыҙҙарҙың башҡортса иркен һөйләшкәндәрен ишетһәм, түбәм күккә тейгәндәй була. Әлбиттә, ғүмер буйы бергә йәшәгән таныштарҙы, дуҫтарҙы ташлап китеүе лә ауыр. Әммә ҡайҙа йәшәргә теләүемде берәү ҙә сикләй алмай бит. Мин һайларға тейеш: ырымбур казактары араһындамы, әллә үҙ башҡортом араһындамы? Хоҙай мине донъяға башҡорт итеп яралтҡан икән, бәлки, кем белә, минең аҡылым, сәскә атҡан кеүек, тик башҡорт мөхитендә генә асылыр һәм дәртләнеп китеп, рухым уяныр. Әле бына телевизорҙан башҡортса тапшырыуҙар ҡарап кинәнәм, радионан үҙ йырҙарыбыҙҙы тыңлап һоҡланам, үҙемде бөтөнләй икенсе төрлө тоям.*

## ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР

Шәжәрә төҙөү - үҙе бер ғүмер. Мәғлүмәт туплау, туғандарҙы барлау, ысынлап та, шуға торошло. Һәр ғаилә, һәр ара

✓ *Ирҙәрҙе көслө зат тиһәләр ҙә, гүзәл затҡа ҡарағанда улар рухи яҡтан күпкә ҡалыша. Ҡатын-ҡыҙға Хоҙай Тәғәлә ҙур түҙемлек биргән. Улар ҡаршылыҡтар алдында юғалып ҡалмай, төрлө ауырлыҡтарҙы күтәрә белә.*



үҙ шәжәрәһен белһә, туғанлыҡ ептәре күпкә нығыр ине. Туғандарҙың ҡан тартыу принцибында тупланыуы үҙенән-үҙе милләттең тупланыуына булышлыҡ итә. Әлбиттә, шәжәрә төҙөү сығымлы эш - матди яҡтан да сығымдар талап ителә, рухи яҡтан да көсөргәнешлек сарыф ителә, ныҡышмалылыҡ та кәрәк. Туғандар тураһындағы мәғлүмәтте тулы килеш хәтергә уйып булмай, ә шәжәрәгә яҙылған мәғлүмәт киләһе быуындарға нисек бар, шул килеш барып етә һәм артабан үҫә.

## ТУҒАН ТЕЛ МӘКТӘБЕ

Атайым тураһында йыш уйлайым. Ул 34 йәшендә генә вафат булды. Шахтер ине. Һуғыш осронда уларҙың быуынына күп ауырлыҡтар төшкән. Район гәзитендә эшләй башлағас, күп кешеләр тураһында яҙырға тура килде, ә бына атай тураһында яҙғаным юҡ. Әсәйемдең яҙмышы ла үҙе бер китаплыҡ. Әммә башкөллө эшкә сумып, тормош ығы-зығыһына күмелеп, һаман был эшкә тотона алмай йөрөйөм, әлегә уй күңелдә генә бөрөләнгән. Ҡай саҡ шул уйҙар тынғы бирмәй, төн урталарында төшкә керә, айырым эпизодтар күңелдә тырнап, тышҡа сығып килгән кеүек. Әле ошо эшкә йәлеп иткән Марс мырҙама, Артур улыма шул хәтлем рәхмәтлемен. Яҙҙам йөҙөнән башланып киткән шөғөл дәрт уятты. Киләсәктә туғандарым тураһындағы хәтирәләрҙе киңәйтеп, яңы материалдар туплап, күләмлерәк әйбер яҙырға тигән өмөт сатҡыһы барлыҡҡа килде. Көрьән биттәрендә теркәлеп ҡалған иҫтәлектәр шул хәтлем ҡәҙерле һәм танһыҡ. Мәҫәлән, урыҫ телендә уҡып белем алған кешегә "бәпескәйем" тигән һүҙҙе уҡыу үҙе бер мәктәп. Был һүҙҙең урыҫса тәржемәһен тулы тәме менән биреүе лә ҡыйын, тойо етмәҫ кеүек.

## НАМЫҪ МЕНӘН ЙӘШӘ

Беҙ батырҙар нәҫеленән, тип әйтеү ҙур яуаплылыҡ тойоғоһо уята. Әммә был уларҙың данына, абруйына ышыкланырға теләү, тигәнде аңлатмай. Беҙ, бөгөн йәшәгәндәр, үҙ көсөбөҙ менән абруй яуларға тейеш. Әлбиттә, ғорурланыу тойоғоһо күңел төбөндә булһын, әммә был һәр мөйөш һайын: "Минең туғаным шундай булған!" - тип, күкрәк ҡағыу булмаһын. Урыҫтар был турала "Примазываться к чужой славе", ти. Әлбиттә, данлыҡлы туғандарыбыҙ бер ҙә сит түгел, әммә уның даны - уныҡы. Кинйә башҡорт халҡының данлыҡлы улы кимәленә күтәрелгән. Ер аҫтына төшөп, көяш күрмәй шахтала эшләгән атайым да ихтирамға лайыҡ. Беҙ уларҙың данында ҡойонмайынса, үҙ ғүмеребеҙҙе лайыҡлы йәшәргә тейеш. Ҡыҙғаныска ҡаршы, үткәндәрҙең данына ышыкланып йәшәүселәр күп. Ундайҙар: "Атайыңдың Мактау ҡағыҙҙарын тотоп бар райисполкомға, яҙҙам итһендәр", - тип әйткәне булды. Әсәйем йыш әйтә: "Атайыңыҙ менән ғорурланығыҙ, әммә уға ышыкланып, һоранып йөрөмәгеҙ, үҙ намыҫығыҙ менән йәшәгеҙ". Ғөмүмән, туғандарыбыҙ араһында улай һоранып йөрөгәндәр юҡ, буғай. Булһа, үҙебеҙҙекен бүлеп бирәбеҙ, ярҙам иткәнгә икеләтә ҡайтарырға тырышабыҙ.

## БӨЙӨК ХАЛЫҠТЫҢ...

1992 йылда Ырымбурҙа башҡортса гәзит сығарыу маҡсатында мине мөхәррир итеп тәҡдим иттеләр, әммә акса булмау сәбәпле, ниәт тормошҡа ашманы. Ул йылдарҙа милли уҙаң уяныр, күҙҙәр асылып, йәшәүгә лә күңелләнгәйне. Аҡһаҡалдар мәсеткә йөрөй башланы, халыҡ бергә тупланып, көнүҙәк мәсьәләләр күтәрә ине. Башҡортостандан милләттәштәр килә башланы. Ләкин күтәрелеш яйлап һүлпәнәйҙе... Башҡорттар араһында башланған күтәрелеш казактарға күсте.

Кешеләр менән танышҡанда мин уйынлы-ысынлы былай тип әйтәм: "Я - маленький сын великого башкирского народа". Шуның менән үҙ халҡымдың башкалар алдында кәм түгеллегенә баҫым яһайым. Башҡорт бик ипле, тыйнаҡ халыҡ. Бәлки, бер аҙ баҫалҡылыр ҙа, сөнки ул артыҡ күренеп барырға тырышмай, баш баҫып эш менән була. Ләкин асыуына тейһәң, йыраҡҡа бул, кәпәсен батыра кейҙеме - яҡшылыҡ көтмә. Уның холҡонда был яғы ла бар. Башҡорт ҡыйыу, сая, тәүәккәл булғанға күрә бит үҙен һаҡлап килә. Сәмиғулла Баймурзин тигән яҙыусы дуҫым Василий Перовскийҙың архивы менән танышҡан. "Архив яҙмаларын уҡығас, беләһеңме, миндә башҡорт халҡына ҡарата ниндәй ғорурлыҡ тойғоһо уянды", - ти ул һәм мауыҡып һөйләргә тотона. Әммә шул яғы бар: башҡорт милләтенең төп өлөшө тупланған Башҡортостандан ситтә, Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе башҡорттарға милләт булараҡ үҙендә һаҡлауы еңел түгел. Шуға күптәр яйлап-яйлап Башҡортостанға күсенә башланы. Әҙәби башҡорт телен белмәһәм дә, элек күберәк рус телендә аралашһам да, үҙемде Башҡортостанда иркенерәк тоям. Өфө буйлап автобуста китеп барғанда егет-ҡыҙҙарҙың башҡортса иркен һөйләшкәндәрен ишетһәм, түбәм күккә тейгәндәй була. Әлбиттә, ғүмер буйы бергә йәшәгән таныштарҙы, дуҫтарҙы ташлап китеүе лә ауыр. Әммә ҡайҙа йәшәргә теләүемде берәү ҙә сикләй алмай бит. Мин һайларға тейеш: ырымбур казактары араһындамы, әллә үҙ башҡортом араһындамы? Хоҙай мине донъяға башҡорт итеп яралтҡан икән, бәлки, кем белә, минең аҡылым, сәскә атҡан кеүек, тик башҡорт мөхитендә генә асылыр һәм дәртләнеп китеп, рухым уяныр. Әле бына телевизорҙан башҡортса тапшырыуҙар ҡарап кинәнәм, радионан үҙ йырҙарыбыҙҙы тыңлап һоҡланам, үҙемдә бөтөнләй икенсе төрлө тоям.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Шәжәрә төҙөү тарих сиҙәмен актарып, орлоҡ сәсеүгә бәрәбәр. Сәсеүсе ер уңдырышлы, орлоҡ тос, һауа шарттары ҡулай булһын, тип өмөт итә. Шәжәрәне лә өмөтөн юғалтмағандар төҙөй. Тарих сиҙәмен актарыусыларҙан хаттар көтәбеҙ.**

*Аһ-Аһ!*

# НИМӘ ЕТМӘЙ БЫЛ... ирҙәргә?

**? "Ир-егет - ил терәге", ти боронғолар. Әммә ни өсөн ир-егеттәребеҙ терәк булыуҙан ситләшә, үҙ йөкләмәләрен ҡатын-ҡыҙға тапшыра бара? Ошо һорауҙарҙы Башҡорт дәүләт филармонияһының эстрада-художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Салауат ИТБАЕВ һәм музыкаль етәксе Илшат ЯХИНға бирҙек:**



**▶ Атайҙарығыҙ һеҙгә ғаиләлә ниндәй ир тәрбиәһе бирҙе?**

**С. ИТБАЕВ:** Эшкә етеҙ, егәрле, оҫта ҡуллы ине атайым. Ул беҙҙе үҙенең хеҙмәте өлгөһөндә тәрбиәләне. Бер ваҡытта ла былай эшләгеҙ, тегеләй эшләгеҙ, тип өйрәтмәне, өгөт-нәсихәт уҡыманы. Үҙенең тормошҡа дөрөҫ ҡарашы, әсәйгә булған хөрмәте, хеҙмәткә булған мөнсәбәте менән беҙгә өлгө булып торҙо. Шуға күрә лә беҙ уға оҡшарға тырыштыҡ, һәр саҡ белемгә, хеҙмәткә ынтылдыҡ, ысын ир-егет булып үҫтек. Ғөмүмән, ғаиләнең алтын ҡаҙығы - ул атай кеше. Шуға күрә лә атай һүҙенең, уның тәрбиәһенең әһәмиәте әйтеп бөткөһөҙ ҙур. Ир балаға тәрбиәне атай бирергә тейеш. Өй эсендә булған йылылыҡты, наҙҙы, һөйөүҙе әсә кеше тыуҙырһа, тышҡы проблемаларҙан, төрлө ауырлыҡтарҙан атай кеше ҡурсалай.

**И. ЯХИН:** Минең атайым да бөтә яҡлап та һәләтле, уңған кеше. Техника өлкәһендә лә, балта оҫтаһы булараҡ та уға еткәндәр һирәк. Эшкә әрһеҙ атайымдың хеҙмәт емештәрен күреп, үҙемә уның сифаттарын тупланым. Музыка сәнғәте юлынан китеүемә лә ул этәргес булып торғандыр. Әле бәләкәй генә сағымда баян һатып алып бирҙе, икәүләп ярышып уйнай инек. Инде ғаиләле булыуыма ҡарамаҫтан, атайымдың ярҙамына һәр саҡ мохтажмын. Тәү сиратта балта менән нисек эш итеүен иҫкә төшөрәм. Хатта ябай ғына сөй ҡаҡҡанда ла унынса эшләргә тырышам.

Шуға күрә, ир тәрбиәһенә килгәндә, ул ниндәйҙер әхләк уҡыу, аҡыл һатыу түгел, ә тап ошо ирҙәр үткән хеҙмәт көсөндә сағыла. Һин ысын ир-егет икән, үҙ донъяңды булдырырға, ғаиләңде ҡурсаларға, балаларыңды шәхес итеп тәрбиәләргә бурыслы.

**▶ Ни өсөн егеттәребеҙ әрмегә барыуҙан ҡаса, буйҙаҡ тормош алып бара, эскелеккә бирелә? Ниндәй бушлыҡ һуң уларҙың күңелендә?**

**И. ЯХИН:** Бөгөн ирҙәрҙең үҙ-үҙҙәренә ышанысы кәмене. Эйе, улар ысынлап та төшөнкөлөккә бирелде. Был, әлбиттә, үкенесле хәл. Күрәһең, хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәрҙән өҫтөнлөк алыу осоро баралыр. Ҡатын-ҡыҙҙар алдан йөрөй, аҡсаны ла улар беҙгә ҡарағанда күберәк таба. Ирҙәрҙе көслө зат тиһәләр ҙә, гүзәл затҡа ҡарағанда улар рухи яҡтан күпкә ҡалыша. Ҡатын-ҡыҙға Хоҙай Тәғәлә ҙур түҙемлек биргән. Улар ҡаршылыҡтар алдында юғалып ҡалмай, төрлө ауырлыҡтарҙы күтәрә белә. Ә ир заттарының иң ҙур кәмселектәренең береһе - улар тормош ауырлыҡтарына тиҙ бирешеп барыусан. Шулыҡтан эскелеккә биреләләр, үҙ-үҙҙәренә ҡул һалалар. Ошо нигеҙҙә ирҙәрҙең гендары көсһеҙләнә. Ирҙәр бәйһеҙләнә, үҙҙәрен ҡулға ала белмәй башланы.

**С. ИТБАЕВ:** Ҡатын-ҡыҙ тәүәккәлерәк, зирәгерәк. Төрлө үҙгәрештәргә тиҙ яраклаша беләләр. Ә ирҙәр ваҡыт үткәс кенә ниндәйҙер бер ҡарарға килеүсән. Бөгөн ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар үҙ вазифаларынан ситләште. Гүзәл зат һәр ерҙә үҙен һынап ҡарарға тырыша һәм күп осракта маҡсатына ирешә, карьера эшләй. Ә ғаиләлә хужабикә итер өсөн беҙ, ирҙәр, уларға мөмкинселек бирмәйбеҙ, шарттар тыуҙырмайбыҙ.

**И. ЯХИН:** Егеттәрҙең яңғыҙ ҡартайыуы, уларҙың яуаплылыҡтан ҡурҡыуынан киләлер. Ауылда ирҙәргә яраҡлы эш юҡ, шуға ла улар ғаилә етәкләр аҡса эшләй алмайҙар. Ихтыяр көсө булған егеттәр генә акса эшләп, ғаилә ҡорорға тәүәккәллек итә. Күптәре буйҙаҡ тормош алып бара, ә был эскегә илтә. Күптәре атаәсәһе елкәһендә йәшәй. Был, әлбиттә, алама күренеш, оятһыҙ замана. Тап ошо егеттәр ирҙәрҙең дәрәжәһен төшөрә лә инде.



**С. ИТБАЕВ:** Улар әрмегә барып, ирлек мәктәбен үтеп ҡайтһалар, ғаилә ҡороу яуаплылығынан ҡурҡмаҫтар ине. Тормош тәжрибәһе етмәй бөгөнгө йәштәргә. Беҙ иһә, әрмегә барырға атлығып тора инек. Дуҫымды минән алда алып киткәс, унан тороп ҡалыуыма шул тиклем ҡайғырҙым. Аҙаҡ миңә лә саҡырыу ҡағыҙы килде. Ул шул тиклем ҡыуаныслы хәбәр ине. Бөтә ауыл ҡәҙерләп оҙатып ҡалды. Ракета частәрендә 3 йыл хеҙмәт иттем. Был йылдар һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Тормошто аңларға өйрәтте әрме.

**И. ЯХИН:** Хәҙер заманаһы башҡа. Социализм осорондағы патриотлыҡ, Тыуған ил алдындағы изге бурыс, егет намыҫы тигән төшөнсәләр юғалды. Элек егеттәр әрмегә бармаһа, үҙен ирегет тип һанамай ине. Бөгөн, киреһенсә, тороп ҡала алғандар күкрәк киреп маһайып йөрөй. Бында, әлбиттә, илдәге сәйәсәттең үҙгәреүе лә ҙур йоғонто яһағандыр.

**▶ Кем ул һеҙҙең өсөн ҡатын-ҡыҙ? Гүзәл затты баһалай белә-һегеҙме?**

**С. ИТБАЕВ:** "Ҡатын-ҡыҙһыҙ донъяның йәме, өйҙең ҡото юҡ", ти халыҡ мәҡәле. Гүзәл зат тураһында бик күп фәлсәфәүи фекер әйтергә була. Улар беҙҙең ярты йәнебеҙ. Беҙ бөгөн ҡатын-ҡыҙҙы ниндәйҙер иркенлеккә сығарып ебәреп, үҙ вазифаларынан алыҫлаштырҙыҡ, шул арҡала ҙур юғалтыу кисерҙек. Ғаилә яҡкан усаҡтың утын һүндермәй тороусы шәхес бит улар. Әгәр был усаҡ һүнһә, ғаилә таркала, йәмғиәт тә бөтә.

**И. ЯХИН:** Ҡатын-ҡыҙ беҙҙең өсөн алиһә. Беҙ гүзәл затҡа табынып йәшәйбеҙ. Улар тормошобоҙҙоң йәме лә, тотҡаһы ла. Өйҙәге сәйәси хәлде ҡатын-ҡыҙ йә ҡыҙҙырып ебәрә, йә тотороҡландыра - барыһы ла уның ҡулында. Ғаиләнең нигеҙе ныҡлы, эсе нурлы булыуы хужабикәнән тора. Ә беҙ уларҙың бары тик ярҙамсыһы ғына.

Ҡатын-ҡыҙ бөтә яҡлап та үҙен өлгөлө итеп күрһәтте, шуға күрә лә уларға ҡарата ихтирамым тағы ла артты. Улар сибәрлеге менән дә, аҡылы менән дә, тырышлығы менән дә оло баһаға лайыҡ.

**▶ Ир-егеттәр тәбиғәт ҡосағындамы, һыраханаламы, ҙҙҙәре генә ил итергә яратыусан. Ни өсөн кәрәк ул ирҙәр компанияһы?**

**С. ИТБАЕВ:** Беҙ, мәҫәлән, иптәш егеттәр менән саңғы кейеп, урманға сығырға яратабыҙ. Йәнлек аулауҙан бигерәк, фекерҙәр менән аралашыу мөһим. Ял итеп, тәбиғәттә йөрөп ҡайтыу - үҙе бер ғүмер бит ул. Бындай аралашыуҙар күңелде байыта. Эштә төрлө стресстар була, уларҙы ғаиләгә сығарып булмай бит инде. Ә дуҫтар менән осрашҡанда асылаһың. Бер-береңде шелтәләп тә алаһың, тәнҡит тә еткерәһең, аҡыллы фекерҙәр менән дә уртаҡлашаһың.

**И. ЯХИН:** Мин үҙем дә дуҫтарымды оҙаҡ күрмәһәм, эстә бушлыҡ кисерә башлайым. Ошондай осрашыуҙарҙан һуң ирҙәр араһында үҙ баһаңды белеп, үҙеңде ирҙәрсә тойоп ҡайтаһың. Шуға күрә лә бындай компаниялар ирҙәр өсөн бик тә кәрәк. Ҡатын-ҡыҙҙың үҙ хәбәре булған кеүек, ирҙәр ҙә ваҡыты менән аралашып торорға тейеш.

**Шулай итеп, бөгөн ир-егеттәребеҙ рухи төшөнкөлөк кисерә. Көслө затҡа үткер ҡараш, ҡыйыулыҡ, талапсанлыҡ, ихтыяр көсө етешмәй. Бәлки, ысынлап та, ҡатын-ҡыҙҙар тормош дилбегәһен үҙ ҡулына алып, ирҙәрҙе үҙ вазифаларынан ситләштергәндер?**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

✓*Беҙ Бөрйәндән дүрт егет бер часҡа эләккәйнек. "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған Әминев Кәлимуллабыҙ алыҫ Ҡытай ерендә башын һалды. Ҡалған өсөбөҙ, шөкөр, иҫән ҡайттыҡ.*

# Әрме VI

**Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, отставкалағы гвардия капитаны Сәлих Дәүләтбирҙин Бөрйән районының Иҫке Монасип ауылында йәшәй. Ул һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн "II Дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы" ордены, "Батырлыҡ өсөн", "Германияны еңгән өсөн", "Японияны еңгән өсөн" миҙалдары менән наградланған. Һуғышҡа 1944 йылда алынып, 1945 йылдағы Бөйөк Еңеүҙән һуң 1950 йылға тиклем армияла хеҙмәт итеүсе яугир тыныс тормошта ла оло ҡаһарманлыҡ күрһәтә, оҙаҡ йылдар тыуған районының төрлө мәктәптәрендә уҡыта, директор вазифаһын башҡара, партия, дәүләт органдарында намыҫлы хеҙмәт итә. Сәлих олатай - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ошо көндәрҙә һуғыш һәм хеҙмәт ветераны үҙенең 80 йәшлек юбилейын билдәләй. Уны ошо данлыҡлы байрамы менән ҡотлап, "Әрме" яҙмаларынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.**

## Һуғыштан һуң

Фашистик Германия армияһы ҡыйратылғандан һуң тере ҡалған яугирҙәр тыныс тормошҡа, һағынып көткән ғаиләләре янына ашҡынды. Беренсе демобилизация 1945 йылдың июль айында үткәрелде. Еңеүҙе Көнсығыш Пруссияла ҡаршылаған, беҙҙең 39-сы армия ғәскәрҙәре был ваҡытта Монголияның һыуһыҙ далалары аша Манчжурия сигенә ҡарай походта ине. Ылауҙарҙа һәм башҡа еңелерәк хеҙмәттә булған 40 йәштән өлкән яугирҙар сафтарҙан алынып, Тыуған илгә оҙатылды.

Икенсе демобилизация 1945 йылдың көҙөндә Японияға ҡаршы һуғыш еңеү менән тамамланғандан һуң булды. Был юлы оло йәштәгеләр менән бергә уҡытыусылар, инженерҙар, агрономдар һәм башҡа белгестәр, өс тапҡыр һәм унан да күберәк яраланыусылар, ҡатын-ҡыҙ яугирҙәр ҡайтарылды. Һуғыштан алда уҡ армияға саҡырылған 1922 йылғыларға тиклемге оло йәштәге һалдат һәм сержанттар 1946 йылда, ә 1923-1924 йылғылар 1947 йылдың яҙында хәрби хеҙмәттән бушатылды. Ә инде 1943, 1944 йылдарҙа һуғышҡа алынған 1925-1927 йылғы иҫән ҡалған йәш яугирҙәргә хәрби бурысты оҙаҡ ҡына, етешәр-һигеҙәр йылға тиклем башҡарырға тура килде. Шулай итеп, 1945 йылдың 9 августа башланған һуғышта Халхин-Гол йылғаһы аша сығып, Ҙур Хинган тауҙарын артылып, ҡаты бәрелештәрҙә японҙарҙың көслө нығытмаларын емереп, Манчжурияның уртаһына август аҙағында килеп еттек.

Һуғыш ваҡытында урта һәм кесе командирҙар менән һалдаттар араһындағы мөнәсәбәттәр йомшара төшөп, ҡайһы берәүҙәр армия уставын һанламай башланы. Һуғышта шәхси һәләте менән күтәрелеп, яңы шарттарға яраҡлаша алмаған батареяның орудие командирҙары - старшина Мельников, өлкән сержант Карташов, сержант Кулебякиндарҙы күп тә үтмәй рядовой ҡиәфәтендә күрергә тура килде. 1947 йылдың яҙында беҙҙең полктың бер сержанты демобилизация хаҡында ишетеп, тәғәйен приказ булмаһа ла, күрше частағы иптәшенә барып, ҡыуанысын "йыуып", бер тәүлек буйына үҙ ротаһына килмәгән. Һуғышта күп тапҡырҙар яраланған һәм наградалар алған был егетте рядовойға төшөрөп, дезиртирлыҡта ғәйепләп, ике йылға дисбатҡа хөкөм иттеләр. Был ваҡытта уның тиҫтерҙәре ҡайта башлағайны.

Дайрэн, Порт-Артур ҡалалары урамына рөхсәт ҡағыҙы менән сыҡҡан саҡта 1905 йылда һәм граждандар һуғышында илдән ҡасҡан рус эмигранттары осрап, Союздағы йәшәү шарттарын һораша торғайны. Беҙ, ыҙалыҡ менән үткән баласаҡ тураһында "онотоп", илдәге "муллыҡты" маҡтайбыҙ. Эмигрант ҡиәфәтендәге ҡайһы берҙәренең НКВД агенттары булыуынан шикләнә инек.

## Хәләл ата балаһына

Беҙҙең гарнизондан алыҫ түгел бер рус эмигрантының ҡыҙы бәләкәй магазин тотоп, көндәлек ваҡ-төйәк әйбер менән һатыу итә ине. Старшина Горюнов шул ҡыҙ менән дуҫлашып алды. Бының өсөн уны шпионлыҡта ғәйепләп, хәрби трибуналдың ябыҡ судында бөтә наградаларынан мәхрүм итеп, 25 йылға иркенән мәхрүм иттеләр. Ярай әле 1948 йылда үлем язаһы бөтөрөлгән ваҡыт булды. Әҙ генә яҙа баҫып, начальниктар күҙенә күренһәң, гауптвахтаға эләктерергә генә торалар. Бындай хәлгә мин дә дусар булғыланым. 1946 йылдың яҙында дивизияның артбригадаһы янындағы кесе командирҙар әҙерләүсе дивизионда уҡып йөрөгән ваҡыт. Һалдаттың көндәлек махорка йәки папирос нормаһын бирмәй туҡтатып торалар, тартҡы килә. Яҡында ғына военторг магазины күренә. Ләкин берәүҙең дә унда барып, папирос һатып алырға баҙнатсылығы етмәй. Мин тәүәккәллек күрһәтергә булдым. Иптәштәрҙән аҡса йыйҙым да, магазинға юлландым. Барып етеүем булды, ҡаршыға ике патруль менән ҡала коменданты килеп сыҡты. Юлдан тайпылып, честь биреп: "Здравия желаю товарищ гвардии подполковник!" - тип сәләмләйем. Документ талап итә был. Мин һалдат кенәгәһен алып күрһәттем. "Ҡайҙа ҡалаға сығырға рөхсәт ҡағыҙың?" тип һораны. Ундай ҡағыҙҙың булмауын әйткәс, ул миңә биш тәүлек ябай арест иғлан итеп, был хаҡта командирыма еткерергә ҡушты.

Коменданттың арест иғлан итеүе хаҡында берәүгә лә өндәшмәнем. Ваҡыт үтә торҙо. Бер ял көнө яңы обмундирование кейеп, рөхсәт ҡағыҙы менән ҡалаға сығырға ғына йөрөгәндә: "Дивизион, плацҡа теҙелергә!" - тигән команда яңғыраны. Артбригада командирының сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары, гвардии подполковник Шугай хәрби дисциплина тураһында оҙаҡ ҡына нотоҡ уҡығандан һуң: "Курсант, Дәүләтбирҙин, стройҙан сығырға!" тигән команда бирҙе. Мин сығып баҫҡас та: "Бына ошо курсантҡа бер нисә көн элек, военторг магазины алдында ҡаланың хәрби коменданты рөхсәт ҡағыҙы булмаған өсөн биш тәүлек арест иғлан иткән һәм командирына хәбәр итергә бойорған, ә приказ һаман үтәлмәгән", - тине лә, "Ә нисек хеҙмәт итә ул?" - тип батарея командирынан һораны. "Ул беҙҙең отличник", - тип яуапланы комбат.

"Ярай, улай булһа, өҫтәмәйбеҙ, бар кейемеңде алыштыр ҙа, марш гауптвахтаға, - тип миңә бойорҙо комбриг урынбаҫары.

...1946 йылдың башында бер нисә һалдатты сафҡа теҙеп, батарея өсөн төшкө ашты өҫтәлдәргә теҙер өсөн ашханаға алып китеп барам. Беҙ батальон казармаһы тәңгәлендә таныш булмаған бер офицер үҙенә саҡырып ҡысҡыра.

-Егеттәр, беҙ ишетмәйбеҙ, боролмайбыҙ, - тинем дә, юлыбыҙҙы дауам иттек.

Офицер бер һалдатты ебәргәс кенә, барып рапорт бирҙем.

-Мин батальондың яңы командиры майор Очеретенко булам. Командирҙың бойороғона буйһонмай маташҡаның өсөн биш тәүлек ябай арест иғлан итәм. Алып китегеҙ! - тип бер сержантҡа ҡысҡырҙы.

Мин ҡайышымды, обмоткаларымды тапшырып, конвой оҙатыуында гауптвахтаға киттем. Хәләл ата балаһына харам килешмәй, тигәне шулдыр. Ғүмерлек һабаҡ булды.

Күп тә үтмәй, полк штабы янында тревога яңғыраны. Полк тиҙ генә йыйылып маневрға китте. Гауптвахтала бер үҙем генә. Казарманан шинелемде килтерҙеләр, ашауҙан да өҙмәйҙәр. Түшәкһеҙ урындыҡта шинелемде ябынып, бүрегемде яҫтап йоҡларға йыйынғайным, часовой тышҡа сығарҙы. Ҡапҡа янында аш тултырылған ике котелок тотоп, күрше батареяла хеҙмәт итеүсе якташым, Ғәлиәкбәр егете Әбделхаҡ Ҡаһарманов баҫып тора. Нарядта икән. Котелоктарҙың береһен миңә, икенсеһен часовойға бирҙе.

## Ҡыҙ мөҙҙәте ҡыҫҡа



Ихлас һөйөү, һөйөлөү ләззәтен татып та өлгөрмәй, 17 йәшлек үҫмер саҡта һуғышҡа алынған малайҙар, ваҡыт үтеү менән буйға ла тартылып, физик яктан сынығып, ҡатын-ҡыҙ наҙын ныҡлап һағынған ир-егеттәргә әүерелдек. Шаян да булдыҡ. Барыбыҙҙың да һөйөшөпвәғәҙәләшеп Тыуған илдә ҡалған ҡыҙҙарыбыҙ кейәүгә сығып бөттө. Әйтеүе генә анһат: тәүҙә һуғышта, аҙаҡ армияла 6-7 йыл йөрөгән һалдатты көтөү еңел тиһеңме? Ҡыҙ мөҙҙәте ҡыҫҡа бит. Тик Курск өлкәһенең егете сержант Михаил Киконковтың Наташаһы ғына, тәүге мөхәббәтенә тоғролоғон белдереп, хат яҙыуҙан туҡтамай. Миша маһая, ҡыҙының ебәргән фотоларын беҙгә күрһәтә. Беҙ фотолағы сибәр ҡыҙҙың йөҙөндә, кәүҙәһендә "кәмселектәр" табырға тырышабыҙ. "Да, Миша, хеҙмәтең тулғансы, Наташаң ҡартая инде, ә беҙҙе яңы өлгөрөп килгән йәш ҡыҙҙар көтә", тип бер ҡатлыраҡ егетте юрамал сәмләндерәбеҙ. Был хәл ҡабатлана торғас, Миша ҡыҙынан ҡотолоу юлын эҙләй башланы. "Егеттәр, давай, мине үлде, тип Наташаға хат яҙығыҙ", ти. Шулай эшләнек тә. Бер ай самаһы ваҡыт үткәс, Киконковты штабҡа саҡырттылар. Штабтан ул уңайһыҙланып, ҡыҙарған йөҙ менән ҡайтып инде. "Эләктем бит, егеттәр", ти. Беҙҙең хатты алғас та, Наташа часть командирына "Михаил нисек һәләк булды?" тип һорап хат яҙған. Полк командиры егетте шелтәләп, үҙенең күҙ алдында хат яҙҙыртып, почтальонға бирҙерткән икән.

Беҙ Бөрйәндән дүрт егет бер часҡа эләккәйнек. Әминев Кәлимуллабыҙ һуғыштағы ҡыйыулыҡтары өсөн "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланды. Үҙе алыҫ Ҡытай ерендә башын һалды. Ҡалған өсөбөҙ, шөкөр, иҫән ҡайттыҡ. Өйләндек, балалар үҫтерҙек. Әбделхаҡ менән Йыһанур тыуған ауылдары Ғәлиәкбәрҙә төпләнде. Йыһанур артелдә һәм урман хужалығында алдынғы эшсе булды, матур донъя көттө. Тик ғүмере үкенесле ҡыҫҡа булды.

Әбделхаҡ ҡайтҡас та, яратҡан шөғөлө - уҡытыусылыҡ эшенә тотондо. Ситтән тороп Темәс педучилищеһын һәм Стәрлетамаҡ пединститутын тамамланы. Оҙаҡ йылдар Ғәлиәкбәр мәктәбенең директоры һәм ауыл Советы рәйесе вазифаһын уңышлы башҡарҙы. Тырыш һәм намыҫлы хеҙмәте өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәйҙең мәғариф отличнигы исемдәренә лайыҡ булды. Уның менән оҙайлы хәрби хеҙмәттә бер-беребеҙгә таяныс булып барлыҡҡа килгән дуҫлығыбыҙ ғүмерлеккә дауам итә. Йыш күрешә алмаһаҡ та, хәл белешеп торабыҙ.

## Һуғыштың "енси тормошо"

Беҙҙең һалдаттар фәхишәләргә йөрөй торғайны. Бер һалдаттан "Трофей сәғәтен трипперға алмаштырған" тип көлә торғайнылар. Властар тарафынан фәхешханалар эшмәкәрлеге тыйылды, ә беҙ шул күрһәтмәне тормошҡа ашырырға тейешбеҙ. Беҙ, ике совет һалдатынан торған патруль һәм ике ҡытай полицейскийы "облаваға" бергә йөрөнөк. Беҙ фәхишәлек менән шөғөлләнеп эләгеүсе хәрбиҙәрҙе, ә полицайҙар фәхишәләрҙе тотоп алып китәбеҙ. Бер ваҡиға хәтерҙә нык һаҡланып ҡалған. Бер урынға барып инһәк, 40 йәштәр самаһындағы, күкрәгендә миҙалдары сыңлап торған иҫерек һалдатҡа барып юлыҡтыҡ. Беҙ уны үҙебеҙ менән алып китергә иткәйнек: "Мин дүрт йыл буйы һуғышып, ҡатын-ҡыҙ күргәнем юҡ. Һеҙ, молокососстар, маңҡа малайҙар, ҡамасаулап йөрөмәгеҙ, сығып китегеҙ!" - тип ҡысҡыра, ҡаты итеп һүгенә башланы. Автомат приклады менән тегенең арҡаһына бер биргәс кенә ыҡҡа килде. Уны комендатураға елтерәтеп алып килдек. Коменданттың бойороғо буйынса "йөрөмтәл" һалдатты һыуыҡҡысҡа индереп бикләнек. Бер нисә минуттан: "Братушки, зинһар сығарығыҙ, туңам", - тигән ялбарыулы тауышы ишетелгәс, асып сығарып, гауптвахтаның ҡәҙимге бүлмәһенә урынлаштырҙыҡ.

... Киске ҡараңғыла ҡала сітендә йөрөйбөҙ. Ҡаршыбыҙға бер ир килеп сыҡты ла: "Руски капитане, мадам",- тип ялбарып илай башланы. Үҙе беҙҙе өйөнә саҡыра. Өс иҫерек офицер бер өйгә инеп, ирен ҡыуып сығарып, ҡатынын көсләргә булғандар икән. Ир артынан эйәреп, янында "Виллис" машинаһы торған өй янына килдек. Эстә ҡатын-ҡыҙ илаған тауыш ишетелә. "Асығыҙ, патруль!" тип ҡысҡырам.

Яуап юҡ. "Асмаһағыҙ, ишекте ватабыҙ!" тип һауаға автоматтан атҡас ҡына тәҙрәне онтап асҡан офицерҙар пистолеттан һауаға ата-ата машинаға ултырып тайҙы. Беҙ уларҙың артынан һауаға атып ҡалдыҡ. Бер ғаиләне хурлыҡ ғазабынан ҡотҡарған өсөн йөрәккә еңел булып ҡалды.

Был ваҡиға тураһында комендантҡа хәбәр иткәс, ул беҙҙе хупланы, тикшереп сара күреләсәк, тине. Аҙаҡ ишетеүебеҙсә, беҙ өркөткән иҫерек баҫҡынсылар осоусылар часынан булған икән. Ниндәй сара күрелгәнен беҙгә, ябай һалдаттарға әйтмәнеләр.

**Сәлих ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**Әбйәлилдәр элек-электән күрше Магнитогорск ҡалаһы халҡы менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Уның исемен дә әйтеп тормайҙар - "город" тиҙәр. Элек һәр ғаиләнең тиерлек Магнитта урыҫ знакумдары булған: беҙҙекеләр ҡалаға сауҙа итергә йөрөһә, ҡаланыҡылар ауылға емеш-еләк, бәшмәк йыйырға килгән. Үҙ-ара аралашҡанда тел белмәү арҡаһында төрлө мәҙәк хәлдәр тыуған. Хәйер, ундай мәҙәк хәлдәргә ауыл халҡы әле лә юлығып тора. Район гәзитендә мәҙәк хәлдәргә конкурс иғлан иткәс, хаттар бик күп килде. Иң ҡыҙыҡлыларын "Киске Өфө" гәзитенә ебәрергә булдыҡ.**
**Рәхимә МУСИНА,**
**"Осҡон" гәзитенең мөхәррир урынбаҫары.**




### РАФАЕЛСЯ

Бер ҡатын Наил менән Рафаил исемле улдарын эйәртеп, ҡалаға барған. Уларҙы йәш сағында заводта бергә эшләгән мәрйә әхирәтендә ҡалдырып, үҙе магазиндар буйлап сығып киткән. Хужабикә малайҙарға аш бешереп ашатҡан. Берәр тәрилкәне бушатҡан ҡунаҡтарға тағы тәҡдим иткән. Наил исемле өлкәне: "Спасибо, наелся", - тип, баш тартҡан. Туйһаң, исемеңде әйтергә кәрәк икән, тип уйлап, бәләкәйе: "Спасибо, рафаелся" - тигән.

### КАК ТЫ ЕЛ?

Элек аҙыҡ-түлек магазиндарында һөт коктейле һатыла торғайны. Ҡалала эшләп йөрөгән бер башҡорт ҡыҙы ҡунаҡҡа килгән ҡустыһын шул эсемлек менән һыйларға булған.

-Ниндәй тәмле. Бының исеме нисек? - тип һораған ауыл малайы.

-Коктейль, - тип яуап биргән апаһы.

Малай ҡорһағын һыйпап: "Хорошо ел, тик нисек атала һуң?" - тип төпсөнә икән.

-Коктейль тим бит, - апай кеше тағы ҡабатлаған.

-Хорошо ел, тип әйттем дәһә, - тип йәне көйгән ҡусты кешенең. - Исеме нимә, тим бит. Ә һин "Как ты ел да, как ты ел". Хорошо ел, конечно...

### ЗАБИЛ

Кино тигән нәмә ауылдарға килеп етмәгән замандарҙа бер башҡорт ҡатынын Магнитта йәшәгән знакумдары кинотеатрға алып барған. Ауылға ҡайтҡас, теге бисәләргә маҡтана икән. "Киноңдың исеме нисек ине?" - тип һораған бер былдыҡлырағы. Ә был ҡатын ул кино тигән нәмәнең исеме була икәнен дә белмәгән, шулай ҙа һыр бирмәҫ өсөн "Нимә генә әле?" тип, иҫләп маташа икән. "Забыл, тиген дә ҡуй", - тигән бая һорау биргән ҡатын.

- Әй, эйе шул, исеме "Забил" ине, - тип ҡысҡырып ебәргән ҡатын.

### ЮЛ ҠАҒИҘӘҺЕ

Элек беҙҙең халыҡ ҡалаға ат менән йөрөгән. Бер мәл ике ҡатын ирҙәрһеҙ генә баҙарға барып ҡайтҡан. Юлда осраған урыҫтар, машиналарын туҡтатып, быларҙы әрләй икән. Икенсе тапҡыр барғандарында ла шул уҡ хәл ҡабатланған. Ниңә беҙ гелән әрләнеп торорға тейеш әле, тип, былар башҡортсалап: "Гурытығыҙҙы ҡыҙғанып тормағыҙ, барыбер киләбеҙ", - тип, ҡаршы талаша икән.

Ҡайтҡас, ҡатындарҙың береһе иренә: "Башҡа Мәғниткә бармайым, юлда урыҫтар әрләшә", - тигән. Эштең айышын төшөнгән ир:

-Ә һеҙ юлдың ҡайһы яғынан йөрөйһөгөҙ һуң? - тип һораған.

- Ҡайҙан теләйбеҙ, шунан йөрөйбөҙ: уңдан да, һулдан да, уртанан да...

-Һеҙгә бит юл ҡағиҙәһен боҙған өсөн асыуланғандар. Гел юлдың уң яғынан йөрөргә кәрәк.

Өсөнсө сәфәрҙә ирҙең өйрәткәндәрен үтәгәс, ҡатындарҙы берәү ҙә әрләмәгән, рәхәтләнеп йөрөп ҡайтҡандар.

**Гөлнур ШАХМОРАТОВА,**
Асҡар ауылы.

### ТӨНГӨ КӨРШӘК

Эмалле һауыт-һаба яңы сыҡҡан мәл була. Бер ҡатын, ҡаймаҡ һалырға йәтеш, тип, төнгө көршәк һатып ала. Бер мәл ҡаймаҡты әлеге көршәккә һалып, Магнит баҙарына китә. Тора-тора, әммә бер кем дә бының ҡаймағын алмай икән. Аптыраған ҡатынға эргәһендә торған берәү көршәктең ысын тәғәйенләнешен аңлатып биргән. Шунан ҡаймаҡ һатыусы эргәһенә туҡталғандарға "беҙҙең халыҡ һеҙҙең кеүек көршәккә ултырмай, тышҡа йөрөй", тип әйтергә уйлап: "Сюда наши не срал, сюда ваши срал", - тип, бөтәһен дә өркөтөп ебәргән.

**Сәғиҙә ҒӘЙНЕТДИНОВА,**
Дәүләт ауылы.

### ПИЯВКА

Бәләкәй сағымда күрше апайға эйәреп, ҡалаға барҙым. Ул һөлөк эҙләй ине. Тик һөлөктөң урыҫса нисек әйтелгәнен белмәйбеҙ. "Хулюк" тип һорап, баҙарҙағы, аптекалағы мәрйәләрҙе аптыратып бөттөк. Ахырҙа, бер аптекаға ингәс, "маленькая змея", тип әйтергә баш етте. "Пиявка, что ли?" - тине дарыу һатыусы. "Покажи", - тине күрше апай. Пиявка тигәне, ысынлап та, беҙ эҙләгән һөлөк булып сыҡты.

**Вәсилә БУРАНОВА,**
Асҡар ауылы.

### САМАУЫР ХАҠЫ

Өләсәйем Магнит баҙарынан самауыр һатып алып ҡайта. Ауыл өсөн был ул заманда ҙур ваҡиға - күрше-тирә сәйгә йыйыла. "Самауырҙы күпмегә алдың?" - тип ҡыҙыҡһыналар. "Әллә... - ти өләсәй. - Урыҫ "хватит", тип әйткәнсе өслөк аҡсаларҙы һелтәнем дә, һелтәнем..."

**Зилдә ЗАҺИТОВА,**
Асҡар ауылы.

### ИКМӘК ТӘМЕ

Һуғыштан һуңғы осор. Ауылда икмәк юҡ. Ҡалала ла уны сират тороп ҡына алып була. Уныһы ла кеше башына - бер буханка. Раҡыя исемле ҡатын яулыҡтарын алмаштырып ябынып, сиратҡа ҡат-ҡат баҫып, өс буханка икмәк ала. Улы ла сиратҡа баҫа.

Ул заманда Магниттың һул ярынан уңына паром менән сығаралар. Паромға ултырғас, шомло хәбәр тарала: "Теге ярҙа милиция тора икән, артыҡ икмәкте тартып алалар". Раҡыя менән улы артыҡ икмәкте ашарға керешә. Ҡаршы ярға сыҡҡансы икмәкте нормаға ҡалдыра былар. Сыҡһалар, милиция ла юҡ, берәү ҙә тикшермәй икән. Үкенһәләр ҙә, туйғансы бер ашап ҡалалар.

**Мөнирә КАШАПОВА,**
Ишҡол ауылы.

### ДЕВКАМ ЧУЛОК

Бер ағайға эйәреп, ҡалаға барҙым. Ул ҡыҙҙарына ойоҡ алырға булды. "Какой размер?" - тип һораны һатыусы. Ағай етди ҡиәфәт менән бармаҡтарын бөгә-бөгә: "Один класс, два класс, четыре класс", - тип, ҡыҙҙары уҡыған кластарҙы һанай башланы. "И бабке", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Һатыусы көлә-көлә кәрәкле размерҙағы ойоҡтарҙы һайлап бирҙе. Мин, ауылдашымды асыуландырыуҙан уңайһыҙланып, көлкөмдө тышҡа сығарып "бушаттым".

**Иршат ИХСАНОВ,**
Рысҡужа ауылы.

### ӘЙТТЕМ БИТ

Беҙҙең ауылдан ҡалаға барған ике ҡатын магазиндар буйлап йөрөй. Йәшерәге иренә баш кейеме алырға уйлай.

-Кәпәс урыҫса нисек була икән? - тип һорай икән.

-Шапка, - тигән олоһо.

-Юҡтыр, шапка бәләкәстәр өсөн бит ул, - тип быныһы ризалашмаған.

Һатыусынан һорарға ҡыймай, ҡатындар урамға сыҡҡан. Шунда олоһо беренсе осраған ирҙең кәпәсен тартып алған да: "Что это называется?" - тип һораған. Быңдай әрһеҙлеккә аптыраған урыҫ: "Шапка!" - тип екергән. "Әйттем бит", - тип, апай әхирәтен етәкләп, кире магазинға алып ингән.

**Фәрзәнә ЮЛМӨХӘМӘТОВА,**
Амангилде ауылы.

### ФИЛ НА ГАРМОШКЕ ИГРАЕТ

Магнитка барырға йыйынған атайыма әсәйем: "Сәй алып ҡайт. Тышында фил гармун уйнап ултырғанын ал", - тип әйтеп ебәрә.

Атайым сәй һатылған урында кәштәләргә күҙ йүгертә башлай. Һатыусы: "Что вы хотели?" - тип килеп етә. Атайым: "Дайте чай, где фил на гармошке играет", - ти. Һатыусы аптырап, ҡат-ҡат һорай икән. Шул саҡ "фил" урыҫса "слон" була икәне атйымдың иҫенә төшкән. Оялышынан ул магазиндан сығып тайған. Тышҡа сыҡҡас, үҙ алдына көлә-көлә сәй алмай ҡайтып киткән.

**Регина БУЛАТОВА,**
Асҡар ауылы.

### ДРАЖЕ-ДРОЖА

Өлкән улым менән Магнитҡа барырға булғас, Мәғмүрә килен үҙенең улын эйәртеп ебәрҙе. Бер магазинда сиратта торғанда, Әслә витринаға күрһәтеп: "Инәй, әсәйем икмәк әсетә торған дрожа алырға ҡушты, ана ята", - тине. "Әйҙә һуң, алайыҡ", - тип, үҙебеҙгә лә, уларға ла икешәрҙән алдым. Ҡайтҡас, икмәк әсетәйем тип, ҡапты асып ебәргәйнем, иҙәнгә ваҡ ҡына түңәрәк кәнфиттәр һибелеп китте. Баҡһаң, улар "драже" тип атала икән. Илләмәгәр ике ғаилә балалары ҡыуанды.

**Мәфтуха МУСИНА,**
Ҡырҙас ауылы.

### КИЛДЕМ ДӘ ИНДЕМ

Әбделғәзе ауылынан бер бабай сана һөйрәтеп, Магнитҡа баҙарға бара. Ҡайтырға сыҡҡанда көслө буран сыға. Дәүләт ауылына етеүгә ҡараңғы төшә. Бабай берәй өйҙә ҡунып, иртәгеһен юлын дауам итергә уйлай. Тәҙрәһенә тиклем ҡарға күмелгән бер өй эргәһенә килә лә: "Эй, хужалар, йоҡларға индерегеҙ әле", - тип әйтеп тә өлгөрмәй, артында торған санаһы шыуып китеп, хәйерһеҙ юлсыны төкөй. Тәҙрәне ватып, санаһы-ние менән өйгә шыуып килеп төшкән бабайға: "Аһ-аһ, рөхсәтһеҙ килдем дә индем", - тиеүҙән башҡа сара ҡалмай.

**Миңзәлә АСҠАРОВА,**
Ҡаҙмаш ауылы.

### БЕРЛЕКТӘРҘЕ ҺАЛҺАМ, НИ БУЛА

Күршебеҙ Сәлиха еңгәй менән әсәйем баҙарға кәзә дебете һатырға бара. Тауарҙары үтемле була. "Әлдә жуликтар күренмәй", тип ҡыуанып, Хәсән ағайымдарҙың фатирына китәләр. Сәй эсеп, ял итеп алғас, Сәлиха еңгәй аҡса һанарға ултыра. Өслөк менән биш һумлыҡ аҡсаларҙы - тәҙрә төбөнә, берлектәрҙе, һанға һуҡмай, иҙәнгә һала. Тышта ҡараңғы, бер ни ҙә күренмәй. Әмәлгә ҡалғандай, тәҙрә асыҡ була. Еңгәй аҡсаларын һалып та бөтә, тыштан бер ҡул һонолоп, аҡсаларҙы тартып та ала. Ни эшләргә белмәй аптыранған Сәлиха еңгәй: "Тәҙрә төбөнә, исмаһам, берлектәрҙе һалһам ни була?" - ти.

**Фатима ҺИБӘТОВА,**
Рысҡужа ауылы.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Илләмәгәр, "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" үтемле булып сыҡты. Көн һайын яуып томаһа ла, төрлө мәҙәк хәлдәр тураһындағы хаттар килеп тора. Быңа әле Әбйәлилдән бер ҡосаҡ мәҙәк килде. Башҡа районлар ҙа буш ятмаҫ, шулай үҙ яҡтарының мәҙәк хәлдәрен туплап ебәрер, бәлки, ә? Юҡ менән булаһығыҙ, тиеүселәргә шуны әйтергә була: мәҙәк хәлдәрҙе уҡығас, ығы-зығылы донъя яҡтырып, күңелгә еңел булып ҡала. Халыҡ юморы шул хәтлем эскерһеҙ, ябай. Төрлө "шаҡҡатыризм"дар юҡ унда - уҡы ла, кинән. Шуныһы ҡыуаныслы: мәҙәк хәлдәрҙә башҡорт халҡына хас булған ихласлыҡ, эскерһеҙлек, кинәйә һөйләп, рәнйетмәҫлек итеп тура әйтә белеү, ҡатмарлы ситуацияларҙа юғалып ҡалмау, төшөнкөлөккә бирелмәү кеүек матур сифаттар ярылып ята. Шулай итеп, "Башҡорт юморы" тип аталасаҡ китап ҡалыная бара.**

***✓ Әгәр ҙә өҙлөгөү билдәләре күренмәһә, организмға ағыулы матдәләрҙе сығарыуҙа ярҙам итергә кәрәк. Унының иң ябай юлы - күп итеп сәй йәки ҡыҙыл көртмәле һәм мүк еләгенән әҙерләнгән татлы һыу эсеү.***



...ҠОЛАҒЫНА

# Имгән сабыймы?

## Батыр була

**Ҡайһы бер йәш әсәләр сабыйҙы имеҙергәме-юҡмы тип баш ватыусан. Уларға табиптарҙың яуабы бер генә - сабый өсөн әсә һөтөнән дә файҙалы һәм ҡиммәтле ризыҡ юҡ. Әсә һөтөнөң файҙаһы тураһында күпме генә ҡабатланмаһын, әле булһа бик күптәр балаһын теләр-теләмәҫ кенә имеҙгән була. Әсә кешенең балаһын имеҙмәкә тырышыуының төрлө имеш-мимешкә бәйле булыуын табиптар түбәндәгесә аңлата.**

**Бала имеҙеү...** йәнәһе түштең формаһын боҙа

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың түш формаһы улар ауырлы саҡта уҡ үҙгәрә. Бигерәк тә тәүге балаһын тапҡан йәш әсәләр түшемдең матур формаһын боҙмайым, тип бала имеҙергә теләмәй. Ә бит бер балаһын да имеҙмәүгә ҡарамаҫтан, 30 йәштән уҙғас, түштәр барыбер формаһын юғалтасаҡ.

**Имеҙеү һимертә имеш...**

Ҡайһы берәүҙәр күҙгә күренеп һимерә. Уларҙың бала имеҙгәндә һимереүе, һөт төшһөн тип ғәҙәттәгенән ике тапҡырға күп ашауына бәйле. Шуның өсөн табиптар саманан тыш күп ашарға кәңәш итмәй, сөнки ҡатын-ҡыҙҙың организмына һөт эшкәртеп сығарыу өсөн көнөнә ике литр шыйыҡса ла етә.

**Айырым аҙыҡтарҙы ғына ашарғамы?..**

Күптәр көндәлек рациондағы аҙыҡ сабыйымдың һаулығы өсөн зарарлы, тип айырым ғына аҙыҡ һайлап ашарға тырыша. Был төптө хата ҡараш, ни өсөн тигәндә, әсә аҙыҡты ни тиклем төрләндереп ашай, сабый ҙа шул тиклем үк кимәлдә төрлө тәмде тоясаҡ. Әлбиттә һуған, һарымһаҡ, ҡауын, селедка тәме



һеңгән әсә һөтөнөң сабыйға оҡшамауы ла бар. Мәҫәлән, ауырлы саҡта кемдер сей һуған ашарға яратҡан икән, хафаланмаһын, сөнки сабый уның тәменә тыуымаҫ борон уҡ күнегә. Үрҙә һанап кителгән аҙыҡтарҙы бала имеҙгәндә урыҡ-һурыҡ ашағанда ғына сабыйҙың эсәк-ҡарынында проблемалар тыуыуы мөмкин.

**Имеп үҫкән бала әсәһенә яҡыныраҡ...**

Ысынлап та, иммәгән баланан айырмалы, имеп үҫкәндәр әсәһе менән күпкә тәрән хистәр бәйләнешендә үҫә. Быны уның етешһеҙлеге тип ҡарарға ярамай. Киреһенсә, ундайҙар үҙҙәрен әсә тарафынан яҡланған итеп тойоуҙан күпкә ҡыйыу, тормош ауырлыҡтарына бирешмәүсән, кешеләр менән еңел аралашыусан көслө рухлы шәхес булып үҫә.

**Бала имеҙеү әсәнең иркен сикләй имеш...**

Әлбиттә әсә балаһын 6 айға тиклем имеҙеү сәбәпле уның янынан бер аҙым тиерлек китә лә алмай. Ләкин ярты йыл бала менән бергә булыуҙың ыңғай яҡтары ла бар. Мәҫәлән, бала тапҡандан һуң организмындағы гормональ үҙгәрештәрҙең яҡынса ярты йыл дауам итеүе сәбәпле, был осорҙа ҡатын-ҡыҙға һаулығын һаҡлауға ҙур иғтибар бүлергә кәрәк. Баланы имсәктән ташлатып, уны ашарға өйрәтһә, әсә былай ҙа үҙен иреккле тоясаҡ. Ә баланы мотлаҡ үҙ мәлендә генә имеҙергә кәрәк, тигән һүҙ дөрөҫ түгел. Ҡасан имгеһе килеүен сабый үҙе билдәләй.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Танау тонған, тын алыуы ауыр, ҡолаҡ, сикә һыҙлай, күҙҙәр ҡырҡылып килә. Тамаҡтың әсетеүе тураһында әйтеп тә тораһы түгел, ашағаныңды саҡ йотаһың. Йүткергәндә баш, тән ауырта. Бер һүҙ менән әйткәндә, хәл яҡшынан түгел, сөнки грипп эләккән...**



# ГРИПП ҮС ҺАҠЛАУСАН...

## Уртаса ауырлыҡта үткән грипп

Әгәр эштә саҡта ошондай хәлгә тарыһағыҙ, кисекмәҫтән өйгә ҡайтып, юрғанға төрөнөп ятырға кәрәк. Былдай хәлдә тән температураһы 39-40 градусҡаса күтәрелә. Көҙгөгә ҡараһаң, үҙеңде танымаҫлыҡ хәлгә төшөүеңде аңлайһың, сөнки күҙҙәр ҡыҙарған, бит яна, хәл юҡ. Әгәр танау ҡанаһа, өйгә табип саҡыртырға кәрәк. Һәр хәлдә, былдай грипп кешене өс-дүрт көн тора алмаҫлыҡ итеп түшәккә һала. Температура түбәнәйә башлаһа, әлбиттә, сирле һауығыуға табан юл ала. Шулай ҙа хәле бер аҙ яҡшырыуға ҡарамаҫтан, тән температураһы аҙна буйы 37 билдәһе тапҡырында буласаҡ. Дөйөм хәлһеҙлек тә ике аҙна дауам итә, сөнки былдай грипп оҙаҡ ҡаршылашыусан була. Ауырыу, иң күп тигәндә, бер-ике аҙнанан һуң ғына һауығып аяҡҡа баҫа.

## Ауыр грипп

Ҡайһы берәүҙәр, ауырырға ваҡытым юҡ, тип, яҡшылап дауаланмай, грипты аяҡ өҫтө үткәрмәксе була. Ундайҙар грипптың бик тә мәкерле, үс алырға яратыусы сир булыуын, күрәһең, аңлап етмәйҙер. Нисек үс ала тиһегеҙме? Нисә көн инде бөтөн тәнегеҙ туҡмалған һымаҡ һыҙлай. Хәҙер шуға йөрәк һуғыуы йышайыуын һәм тын етмәй башлауын да өҫтәгеҙ әле. Тора-бара күңел болғаныпы, күҙгә теләһә ни күренеп, тән дә ҡалтырай башлаһа, грипптың аяуһыҙ тырнаҡтарына эләктем, тип уйлағыҙ. Шуныһы ҡурҡыныс, ауыр грипптан мейе йәки үпкә шешенә. Ғөмүмән, был сир үҙенең мәкерле эшен бик тиҙ башҡара һәм уның аҙағы фажиғәле тамамланыуы ла бар. Ауыр үткән грипптың "яуызлығы" организмдың бөтөн системаһына һәм ағзаларына ҡағылыу сәбәпле, уның эҙемтәләре ғүмер буйы үҙен һиҙҙереп торасаҡ.

## Еңел грипп...

Әгәр һалҡын ҡышты ауырымай-нитмәй сығыу өсөн организмығыҙҙы алдан сыныҡтырһағыҙ, йәки һалҡын тейҙереү менән йылыға төрөнөп, дауаланһағыҙ, грипп һеҙҙе ҡурҡытып ҡына үтер. Ҡайһы саҡта үҙен әллә ни белгертмәгәс, уны һуң абайларға мөмкин.

## Парагрипп

Былдай грипп бик аҫтыртын була. Ул үҙен һиҙҙертмәй башлана һәм кешене түшәккә һалыр кимәлгәсә көсәйеп тә китмәй. Температура ла 38 градусҡа тиклем урыҡ-һурыҡ күтәрелеп, ике көндән түбәнәйә. Күптәр хатта температураһы күтәрелмәй генә ауырый. Әммә парагрипп тамаҡты ауырттыра һәм ҡаты йүткертә. Йыш осраҡта ауырыуҙың тауышы ғырылдап сыға йә бөтөнләй юғала.

## Аденовируслы инфекция

Был инфекция ла, грипп һымаҡ, кешене аяҡтан йыға. Температура 38-39 градусҡаса күтәрелеп, ике аҙна буйына ла түбәнәймәҫкә мөмкин. Тәүге көндән үк кешене тымау һәм тамаҡ ауыртыуы йонсота, күҙҙәр ҡырҡылып килгән һымаҡ әсетә. Бер аҙҙан күҙ ҡабағы аҫтында, тамаҡта һәм миндаль биҙҙәрендә аҡһыл-буҙ таптар хасил була. Был мәлдә тән температураһы 37 градустан юғары күтәрелмәй. Лимфатөйөндәрҙең бүртенеүе бөтөн тәнде һыҙлата. Йыш осраҡта эс ауырта һәм оло ярау ауырлаша. Хәлһеҙләнеүҙең өҙлөгөүҙәргә килтереүе ихтимал. Ә өҙлөгөүҙең иң яманы - пневмония.

## Грипп менән нисек көрәшергә?

Әгәр ҙә өҙлөгөү билдәләре күренмәһә, организмға ағыулы матдәләрҙе сығарыуҙа ярҙам итергә кәрәк. Унының иң ябай юлы - күп итеп сәй йәки ҡыҙыл көртмәле һәм мүк еләгенән әҙерләнгән татлы һыу эсеү. Шулай уҡ шифалы үлән төнәтмәләре лә токсиндарҙы ҡыуа. Тамаҡты һәм танау ҡыуышлығын аҡ сәскә йәки календула төнәтмәһе менән сайҡау файҙалы. Температура юғары булмаһа, ошо уҡ төнәтмәләрҙе ингаляция өсөн дә ҡулланырға мөмкин. Организмды нығытыу өсөн әлморон һәм ҡара ҡарағат сәйе шифалы. Вирустың әүҙемлеген кәметеү өсөн уға ҡаршы махсус препараттарҙы файҙаланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Ауырый башлағас та ошо кәңәштәргә ҡолаҡ һалһағыҙ, сир бик интектермәҫ һәм өҙлөгөүҙәр ҙә булмаҫ. Ләкин шифалы үлән төнәтмәләренән тыш, бик кәрәк тапһағыҙ, парацетамол һәм йүткереүҙе баҫыусы дарыуҙарҙы ла эсергә мөмкин. Аспирин балалар өсөн зарарлы. Ә антибиотиктар вирусты үлтермәй, шуның өсөн уларҙы грипп менән бергә бактериялы инфекция эләккәндә генә эсергә кәңәш итәләр. Нисек кенә булмаһын, шуны иҫтән сығармау мөһим: зарарһыҙ дарыуҙар булмай, берәүҙе ул сирҙән арындырһа, икенселәрҙең һаулығына зыян килтерә.

**Гриппты һалҡын тейеүҙән нисек айырырға?**

**Ауырый башлау**

ОРВИ (халыҡ телендә - һалҡын тейҙереү) йыш осраҡта һәлмәк үтеүсән

Грипп - тәүҙән үк көслө.

**Тән температураһы**

ОРВИ - 38 градустан юғарыға һирәк осраҡта күтәрелә.

Грипп - ике-өс сәғәт эсендә температура 39 градусҡа етеп, өс-дүрт көн шул кимәлдә ҡала

**Организмдың ауырыуға бирешеүе**

ОРВИ - хәлһеҙлек, ләкин дөйөм хәл торошо ҡәнәғәтләнерлек.

Грипп - өшөп ҡалтырата, тирләтә, баш әйләнә, бигерәк тә күҙ һәм сикә тирәһе ныҡ ауырта, тән һыҙлай һәм яҡтылыҡ күҙҙе ҡырҡып килгәндәй була. Былдай әрнеп-һыҙланыуҙар ҡапыл башлана һәм йылдам рәүештә бөтөн организмға тарала.

**Йүткереү һәм күкрәктең ауыртыуы**

ОРВИ - йүткереү ҡоро һәм өҙөк-өҙөк булып ҡапыл башланып, бер нисә көн дауам итә.

Грипп - икенсе көнөндә үк бөтөн тәнде ауырттырып, интектергес йүткереү башлана.

**Тымау һәм танауҙың тоноуы**

ОРВИ - былар һалҡын тейеүҙең төп билдәләре.

Грипп - бер нисә көндән башлана, ләкин бигүк яфаламай

**Тамаҡ ауыртыуы**

ОРВИ - төп билдәһе.

Грипп - был билдәләр бер нисә көн үткәс күренә башлай.

**Күҙ ҡыҙарыуы:**

ОРВИ - бактериялы инфекция эләккәндә генә ҡыҙара.

Грипп - һәр саҡ ҡыҙара.

**("Российская газета"нан).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# Көнләшеүме? Протесмы?

... ир-ат менән ҡыҙ-ҡатын араһында була торған йәмһеҙ бер тойғоно "көнләшеү" тип атайҙар. Күптәр көнләшеүҙе кешенең мәҙәниәтһеҙлеге, тәрбиәһеҙлеге, наҙанлығы һөҙөмтәһендәге етешһеҙлеге тип атарға күнеккән. Әммә шулаймы икән? Миҫалға көнләшеү тойғоһо ҡорбаны булған рус шағиры Александр Пушкинды ғына алайыҡ. Уның ҡатыны алдында аҡса һәм биҙәүестәр менән "уйнаған" Дантесҡа Рәсәйҙең генә түгел, донъяның иң алдынғы ҡарашлы аҡыл эйәһен, юғары мәҙәниәтле, киң эрудициялы һүҙ оҫтаһын сығырынан-сығарыуы бер ни тормаған. Әлбиттә, был осраҡта Дантес кемдеңдер заказын ғына үтәгән. Шулай булғас, көнләшеүҙе мәҙәниәтһеҙлеккә, тәрбиәһеҙлеккә һәм наҙанлыҡҡа бәйләп аңлатыу бигүк дөрөҫ түгел. Был осраҡта Пушкиндың көнләшеүен ул саҡтағы Рәсәй йәмғәтселегенең яңы фекерҙе, яңы идеяны ҡабул итмәгән "һөрһөгән ҡатламына" протесы итеп баһаларға ла була. Ғөмүмән, һәр бер көнләшеү уға бирелгән баһа исеме менән аталырға тейештер ул. Ысынлап та, кемделер көнләшергә мәжбүр иткән сәбәп ул кешегә ҡаршы, уны юҡ итергә йүнәлтелгән ғәмәл дә булыуы бар бит. Шулайҙыр... Шулай булмаһа, Пушкин һынлы Пушкин аҡылһыҙлыҡ ҡорбаны булмаҫ ине бит.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

✓ *Кескәй сакта беҙ шул хәтлем сафбыҙ. Донъяны ла беҙ ана шул сафлыҡ күҙлегенән ҡабул итәбеҙ. Үҫә килә, донъяға ҡараш үҙгәрә. Ололар үҙгәртә фекеребеҙҙе.*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ...

## күңел төрмәһенә бикләмә

**Ниһайәт, "Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһына тәүге хат килде! Уның авторы - яраткан Фәүзиә апайыбыҙ Яхина. Һеҙ уның нескә тойғоло, фәлсәфәүи фекерҙәрен йыш уҡыйһығыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, рубрикаға башлап апайыбыҙ яуап биреренен тоҫмаллап, күптән яуап көтә инек.**

● "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһен уҡығас, күптәр бик кескәй генә саҡтарын иҫенә төшөргәндер, тип уйлайым, - тип башлаған ул хатын. - Яҡты донъя менән танышып, уның һәр һулышын тойоп, һәр яңылыҡҡа һоҡланған саҡтағы уй-хистәр онотола буламы ни инде! Кескәй саҡта беҙ шул хәтлем сафбыҙ. Донъяны ла беҙ ана шул сафлыҡ күҙлегенән ҡабул итәбеҙ. Үҫә килә, донъяға ҡараш үҙгәрә. Ололар үҙгәртә фекеребеҙҙе. Ә инде мәктәптә, башҡа уҡыу йорттарында белем туплағас, беҙ бүтәндәр кеүек фекер йөрөтә башлайбыҙ, ҡатып ҡалған ҡағиҙәләргә буйһонабыҙ. Әммә сабый саҡтағы уйҙар татлы хәтирәләр булып ҡалҡып сығып, хисләндерә тора.

7-се класта физика, химия фәндәрен өйрәнә башлаған мәл хәтерҙә. Уҡытыусы һөйләгәндәрҙән төрлө металдарҙың, һыуҙың, матдәләрҙең ваҡ ҡына күҙгә күренмәгән өлөшсәләрҙән тороуын ишетеп, бик аптырап ҡалдым. Был турала бит мәктәпкә уҡырға төшмәҫ элек, алты йәшлек сағымда уҡ уйлана инем. Һыу бик ваҡ өлөшсәләрҙән торалыр, тик күҙгә күренмәйҙер, тигән уй ҡулымды йыуып торғанда килгәйне. Әле лә иҫемдә: шул саҡ һыуҙы бик оҙаҡ бармаҡ остарым менән һәрмәнем. Күреп булмаһа ла, тойоп булалыр, тип уйланым. Тоя алманым, әммә ваҡ ҡына күҙгә күренмәгән өлөштәр барҙыр, тигән уй хәтеремә уйылды. Баҡтиһәң, һыу $H_2O$ өлөшсәләренән тора, тип, ғалимдар иҫбат иткән икән дә!

Хатта тәү тапҡыр үҙемдең сағылышымды көҙгөлә күреүем дә иҫемдә. Ауыл өйҙәрендә элек ҙур көҙгөләр булманы, булғандарын да бейеккә элә инеләр. Бәләкәй буйлы ҡыҙыҡайҙың ҡайҙан ғына буйы етһен инде! Ҙур көҙгөнө тәү тапҡыр ҡалаға килгәс, мәктәптәге йыр бүлмәһендә күрҙем. Уның бейеклеге түбәнән иҙәнгә тиклем ине. Эй, көҙгөләге ҡыҙыҡай менән ҡыуышып уйнаным! Хәйлә ҡороп, ул "ҡыҙыҡай"ҙы тоттом тигәндә генә уның үҙем икәнен аңланым. "Бына мин ниндәй икәнмен!" тип иғтибар менән үҙемде күҙәтеүем шул саҡ ғүмергә иҫемдә тороп ҡалды. Шул кескәй сағым: "Тот мине!" - тип йүгереп килеп сығыр ҙа, йүгереп ҡасыр кеүек. Тик тота алмайбыҙ шул бала сағыбыҙҙы...

Йәшәй-йәшәй күпте беләбеҙ. Ул белем йөгө яурындарҙы баҫа.

Бер мәл яҙыусы һөнәрен һайлағандар тураһында уҡығайным. Бик күп уҡыған яҙыусылар тик үҙенсә генә балҡытып яҙыу һәләтен юғалта икән. Бына шундай ҡыҙыҡлы фекергә килгәндәр был мәсьәләне өйрәнеүселәр. "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһен уҡып сыҡҡас, бала сағымды ябай таштарға оҡшаттым. Ҡояштың нурҙары иң тәүҙә балаларға төшәлер... Бушҡамы ни, бала саҡта күп һоҡланабыҙ, йылмаябыҙ...

**Шулай итеп, яңы риүәйәт...**

● Бер көн батша үҙенең ярандарын һынап ҡарарға булған. "Кем дә кем мин күрһәткән йоҙаҡты аса ала, шул кеше батшалыҡта юғары вазифа биләйәсәк", - тигән ул. Батшаның ярандары үҙ хакимын уратып алған. Күпте күргән, аҡыллы, тәжрибәле вәзирҙәр ишектәге бик ҙур йоҙаҡты күреп, шаҡ ҡатҡан. Бындай ҙур йоҙаҡты улар тәү тапҡыр күргән. "Йә, кемдең батырсылығы етә?" - тип һораған батша. Берәүҙәре: "Мин үҙ вазифам менән былай ҙа ҡәнәғәт", - тип уйлап, шундуҡ баш тартҡан. Икенселәре, ҡыҙыҡһынып, йоҙаҡты төрлө яҡлап тикшерергә тотонған. Оҙаҡ ҡына уйлағандан һуң улар "Юҡ, был йоҙаҡты асып булмай", тигән ҡарарға килгән. "Шундай аҡыллы вәзирҙәр ҙә баш тартҡас, беҙҙең бөтөнләй хәлдән килмәй", - тип өсөнсөләре лә ҡыйыуһыҙ ғына ситкә киткән. Тик бер вәзир генә ҡыйыу рәүештә йоҙаҡ янына килгән. Ул тәүҙә йоҙаҡты иғтибар менән тикшереп сыҡҡан, шунан ҡапыл ғына бар көсөнә йоҙаҡты аҫҡа тартҡан. О, мөғжизә, йоҙаҡ асылған! Ул бикләнмәгән булған! Бары тик уның ҙурлығынан ҡурҡмайынса, ҡыйыу ҡарарға килеп, йоҙаҡты асырға тырышлыҡ һалырға ғына кәрәк булған.

Батша йоҙаҡты асырға батырсылыҡ иткән вәзиргә былай тигән: "Мин һиңә вазифалы урын бирәм, сөнки һин күргәнеңә һәм ишеткәнеңә генә ышанмайһың, үҙ көсөңә лә таянаһың һәм ҡыйыу аҙым яһай беләһең".

● *Йоҙаҡ тигәндән, Мирзакәрим Норбековтың Өфөгә килгән бер уҡыусыһы һөйләгән кинәйә хәтергә уйылып ҡалған.

Бер кешене (Аллам һаҡлаһын!) 25 йылға төрмәгә ултыртҡандар. Ул тотҡондағы һәр бер көнөн һанап, үҙе ултырған бер кешелек камераның стенаһына сыйғыслап, тамға һалып барған. Көнөнә өс тапҡыр аҙыҡ алып килеүсе төрмә һаҡсыһынан башҡа бер кемде лә күрмәгән ул. Шулай көн артынан көн үткән. Бер йыл, ике йыл, ун йыл, ун биш, егерме йыл... Егерме биш йылын тултырып, һуңғы көнө еткәс, тотҡон стенаға һуңғы тамғаһын һалған һәм азатлыҡҡа сығарыуҙарын көтә башлаған. Төш еткән. Көн кискә ауыша башлағас, ҡарһаланып, ишекте туҡмай башлаған был. Оҙон коридорҙа яйлап ҡына атлап килгән төрмә һаҡсыһының аяҡ тауыштары ишетелгән. Ул ишекте асҡан һәм былай тигән: "Сыҡ, нимә ҡарап ултыраһың? Егерме биш йыл буйы ишек асыҡ булды, ә һин уны асырға маташып та ҡараманың".

● *Ике кинәйәлә лә һүҙ йоҙаҡ тураһында бара: беренсе осраҡта вазифа буйынса күтәрелеү өсөн ҡурҡыныс йоҙаҡты асырға кәрәк булһа, икенсеһендә - асыҡ ишектән



азатлыҡҡа сығыу өсөн кәрәк ул ышаныслы аҙым. Ә нимә ул азатлыҡ? Вазифа буйынса үрләү азатлыҡмы, әллә ниндәй генә вазифала булһаң да, үҙ азатлығыңды һаҡлай белеүме? Ғөмүмән, азатлыҡты бикләп буламы? Булһа, кемдәр бикләгән уны? Уйлап ҡарайыҡ. Асылда, бала донъяға азат булып тыуа. Әлбиттә, сағыштырмаса азат булып. Беренсенән, күңеле азат уның. Үҫә килә, донъяға ҡарашы үҙгәрә килә, аңы яңы мәғлүмәттәр, яңы идеялар менән тулылана. Ярай ҙа һуң изгелек менән генә тулышһа ул бала күңеле! Үҙенән алда йәшәгәндәрҙең тормош тәжрибәһенә таянып төҙөлгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡағиҙәләр, төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, догмалар кеше аңын яйлап сикләй, уны ҡалыпҡа бикләй. Был да бит үҙенә күрә төрмә. Азатлыҡҡа ынтылыусы күңелде биктә тотҡан төрмә. Аң берәй идеяны йөҙ проценты менән дөрөҫ тип ҡабул итһә, ул аңдың эйәһе фанатҡа, зомбиға әүерелә. Улай булғас, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе инҡар итергәме, тиер берәү. Ә уларҙы ниңә инҡар итергә? Бары йолаларҙың изгелек яҡлыһы менән яуызлыҡ яҡлыһын айыра белеү кәрәктер. Изгелек тик әкиәттәрҙә генә еңә, тормошта бөтөнләй улай түгел, тип әйтер, бәлки, берәү. Һорауҙар, һорауҙар... Мәңгелек һорауҙарға яуап тапмайынса күңел төрмәһенән азатлыҡҡа сығып булмай. Иң үкенеслеһе шул: был төрмәгә кеше үҙен үҙе бикләй. Ишек асыҡ, сығырға ғына кәрәк - әле ирекле уй-фекерҙәребеҙгә бер кем дә хужа түгел. Дөрөҫөрәге, беҙ әйтелмәгән фекергә генә хужа, әйтелгәне - ҡол...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН

**Маҡсатҡа табан барып, уңыш баҫҡысының тағы бер баҫҡысына күтәрелдек. Ләкин теләгәнемә ирештем, тип уйларға иртәрәк. Ни өсөн тигәндә, беҙ уңыш баҫҡысының тағы ла бейегерәк үрҙәрен яулай башлаясаҡбыҙ. Ошоға тиклем яулаған аҙмы-күпме уңыштарыңды барлап сыҡ та, ултырып ял итеп ал. Шунан тәрән итеп тын ал да, яңы пландар ҡороп, эшеңде дауам ит.**

# Сәмсел булһаң, еңеү килер...

Маҡсатлы эштә уңыш яуларға теләгән кешеләргә бер миҫал килтерәм. Үткән быуаттың бөйөк сәйәсмәне Уинстон Черчилль үҙенең тарихи әһәмиәтле ваҡиғаларға бай тормошондағы иң сетерекле мәлдәрҙә һәр саҡ: "Бер ваҡытта ла бирешмә. Бер ваҡытта ла, бер ваҡытта ла, бер ваҡытта ла бирешмә!" - тип үҙен ҡанатландыра белеүе арҡаһында иң ҡатмарлы хәлдәрҙә лә ҡаушамай, өҫтөн булып ҡалған. Уның ихтыяр көсө ныҡлығына, маҡсатлы, төплө ҡарашлы булыуына һоҡланғандар...

Һәр кем үҙ ғүмере өсөн үҙе яуаплы. Маҡсатыңа табан барғанда ниндәй генә ауырлыҡтар осрамаһын, уларҙың яҡшырасағына өмөтөңдө өҙмә. Күңелең һәр саҡ тыныс булһын, башыңды юғары тот.

Бер таныш ҡатын беҙҙең илгә рәсми визит менән килгән бер ҙур кампания президенты менән нисек осрашыуын һөйләгәйне. Президент янына инер өсөн халыҡ күп йыйыла, бәғзеләре сабырлығын юйып таралышып бөтә, ә ул коридорҙа ете сәғәт сират көтөп ултыра һәм уның ҡабул итеүенә ирешә. Президент ҡатындың сәмле холоҡло булыуына һоҡлана һәм бик арыған булһа ла, уның проблемалары хаҡында һөйләүен ихлас тыңлай. Ярҙам итергә вәғәҙә итә. Шулай итеп, ҡатындың байтаҡ мөһим проблемалары хәл ителә. Президент ярҙам иткәс, эшендә хәле яйға һалыныр инде, тиерһегеҙ. Президент хәл итмәй шул, уның ярҙамы ҡатындың сәмсел, маҡсатлы, ныҡышмал булыуының һөҙөмтәһе генә. Ни өсөн тигәндә, ҡатын яуланаһы уңыштарҙың фәҡәт үҙенән генә тороуын яҡшы аңлаған кешеләрҙең береһе. Әгәр ул башҡалар кеүек сиратта ултырырға иренеп ҡайтып китһә, уға үҙенән башҡа кем ярҙам итер ине...

Шуны онотма: кеше ғүмеренең иң киҫкен, иң ауыр минуттарында ла хәлде яйға һалырлыҡ юлдар табыла. Хатта сиселере иң өмөтһөҙ һымаҡ күренгән мәсьәлә лә сиселә.

**Бәхетле булырға бәхетһеҙлек ярҙам итте, тигән мәҡәлде иҫеңә төшөр әле. Күңелеңдән һәр саҡ: "Йыһандың Яҡты көстәренә һәм үҙемдең Минемдең тормоштоң уңышлы юлына алып сығырына ышанам. Ҡайҙа йөрөһәм дә, үҙемдең яҡланғанлығымды беләм", тип ҡабатларға онотма. Был һүҙҙәр һиңә тормош һынауҙарын еңергә һәм уңыштың тағы бер бейек баҫҡысына күтәрелергә ярҙам итәсәк. "Һәр бер ваҡиғала, күренештә, хатта һәр бер уйҙа кешенең үҫешенә йүнәлеш биреүсе маҡсат йәшеренгән була. Ошо маҡсатты табып, уның етәкселегендә йәшәү - беҙҙең был тормоштағы төп бурыс" - тигән бер аҡыл әйәһе. Көслө рухлы, сәмсел һәм тырыш бул. Үҙеңә ышан. Алда һине тағы ла ҙурыраҡ уңыштар көтә.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

# Ҡош киҙеүе...

## тағы яҡынлай

**Республикала ҡош киҙеүенә ҡаршы киң йәйелдерелгән көрәш башланды. Ҡыштың йылы килеүе арҡаһында был сирҙең вирусы тиҙ арала таралыуы мөмкин.**

- Вирус беҙгә көньяҡ-көнбайыштан һәм көньяҡтан килеүе ихтимал. Гонконгта, Вьетнамда, Японияла, Венгрияла һәм Рәсәйҙең Краснодар крайында ул теркәлгән дә инде, - ти Россельхознадзор идаралығының ветнадзор бүлеге начальнигы урынбаҫары Азамат БУКАНОВ. - Былтыр вирус Башҡортостанға килеп етә яҙып, Силәбе өлкәһенең сигендә ете саҡрым алыҫлыҡта теркәлгәйне. Был ҡурҡыныс республиканың 2000 ауыл-ҡалаһына янай, сөнки улар йылы яҡтан ҡайтҡан ҡоштар туҡтаған һыу яҡтылығына яҡын урынлашҡан. Был территорияла әле 2 миллионға яҡын ҡош-ҡорт иҫәпләнә. Яҙға ҡарай уларҙың һаны 2-3 тапҡырға арта. Ҡурҡыныс урындарҙағы ҡош-ҡортто беҙ бушлай вакцинациялаясаҡбыҙ. Март айында был эш кисектермәйенсә башланасаҡ. Әле 6 миллион вакцина дозаһы әҙерләнгән. Ҡош фабрикаларында был эш күптән башланған. Әлегә ҡурҡыныс юҡ, шуға күрә республикала етештерелгән ҡош итен ҡурҡмайынса ашарға була. Шуны ла әйтергә кәрәк: оҙағыраҡ ҡайнатҡанда иттәге вирус "үлә".

**Ҡош киҙеүе билдәләрен нисек белергә була:**

- **Ҡоштоң ҡауырһындары тырпая.**
- **Кикереге күгәрә.**
- **Хырылдап тын ала.**
- **Муйыны, түше шешә.**
- **Тәне тартыша.**

**Ҡоштар күпләп ауырымаҫ элек урындағы ветстанцияға мөрәжәғәт итергә кәрәк.**

*Яҡшы шаяртыуҙы баһаларға өйрән, ләкин үҙең шаяртыуҙан тыйыл: башҡаларҙың шаяртыуҙы аңлау-аңламауын белмәйенсә, уңайһыҙ хәлгә ҡалма.*

**(Уильям Джеймс).**



*КҮҢЕЛЕНДЕ АССӘЛЕ!*

**Ағыла уйҙарым, ағыла,**
**Нимә булыр тағы ла?**
**Донъя яңылыш юл ала**
**Ярҙам ит беҙгә Алла!**

**Кешелекте яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа саҡырған, халҡыбыҙ, еребеҙ киләсәге хаҡында уйландырырлыҡ ошондай тәрән мәғәнәле, моңло йырҙы күптәрҙең ишеткәне барҙыр. Беренсе тапҡыр был йыр "Йәшлек-шоу-2005" конкурсында яңғырағайны. Шаян, дәртле, хатта ниндәйҙер кимәлдә еңел-елпе йырҙарҙы тыңлағандан һуң, сәхнәгә сираттағы конкурсант - М.С. Баш килеп сыҡҡас, исеменә ҡарап, тамашасыларҙың йөҙөндә әллә ни ғәжәпләнеү ҙә тойолманы. Тик уның башҡарыуындағы "Ағыла уйҙарым" йырын тын ҡалып тыңлағандан һуң ғына халыҡ егеттең сығышын көслө алҡыштарға күмде. Рэп стилендә яҙылған йыр йәштәрҙең генә түгел, олораҡ тамашасыларҙың да йөрәген әсир итте. Жюри М.С. Баш - Заһит Ҡунафинға "Өмөт" номинацияһын тапшырҙы. Был талантлы, рухлы егетебеҙ менән уҡыусыларыбыҙҙы яҡындараҡ таныштырыу маҡсатында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# УЙҘАРЫ...

## донъя хаҡында

- Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылында тыуғанмын, - тип башлап китте Заһит. - Бәләкәй саҡтан уҡ башҡорт эстрадаһына ниндәйҙер яңы йүнәлеш индергем килде, йәштәребеҙ үҙебеҙҙең йыр-моңдо тыңлап үҫһен ине, тип хыялландым. Мәктәпте тамамлағас, йыр буйынса китмәнем, күңелем ҡурайға тартылды. Сәнғәт училищеһының ҡурай класында белем алдым. Артабан Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының музыка ҡоралдары кафедраһына уҡырға индем. Әле 4-се курста уҡып йөрөйөм. Йырҙар ижад итәм, үткән көҙ "Йәшлек-шоу" фестивале менән республика ҡала-райондары, күрше өлкәләр буйлап гастролдәрҙә сығыш яһаным. Күптән түгел тағы ла бер ҡыуаныс кисерҙем: "Уйҙарым" тип аталған компакт-диск һәм аудиоальбомым донъя күрҙе. Тамашасының ижадымды хөрмәт итеүе, беренсе аудиоальбом һәм компакт-дискымдың сығыуы мине тағы ла ҡанатландырып ебәрҙе. Йәнә бер шатлығым менән уртаҡлашҡым килә: яңыраҡ Башҡортостан киностудияһы йәштәр өсөн фильм төшөргәйне. Унда минең йырыма ла клип төшөрөлдө.

**Сәнғәт юлын һайлаһаң да, буласаҡ һөнәрең йыр менән бәйле түгел. Эстрадаға бала саҡ хыялын тормошҡа ашырыу ниәтендә килдеңме? Был аҙымды яһар алдынан төплө уйлап, ете ҡат үлсәп ҡарағанһыңдыр. Шулай булмаһа, беренсе тапҡыр сәхнәгә сығып, шунда уҡ тамашасы күңелен арбай алыр инеңме ни?**

- Тәү ҡарашҡа ғына еңел генә популярлыҡ яулаған кеүек тойолалыр, бәлки. Ләкин уның тарихы башҡасараҡ. Ысынлап та, башҡорт эстрадаһында үҙемдең тауышты ишеттерергә, яңылыҡ индерергә теләп тә, ҡыйыулығым етмәй йөрөй ине. 2004 йылда һеңлем "Йәшлек-шоу" фестиваленә һайлап алыу туры башланыуы хаҡында ишеткән дә, мине лә өгөтләп, икәүләшеп конкурсҡа барып ҡарарға булдыҡ. Беренсе турҙа уңышлы ғына сығыш яһаһаҡ та, икенсе турҙан үтә алманым. Минең әйтергә теләгәнемде аңламанылар шикелле, тигән ҡарарға килдем һәм сәмләнеп китеп, киләһе йылға "Йәшлек-шоу" фестивален яулаясаҡмын, тигән маҡсат ҡуйҙым үҙемә. Ул осорҙа шәхси һаҡ ойошмаһында эшләп йөрөй инем. Бер ваҡыт эштә ултырғанда минең менән бергә эшләүсе егет йоҡлап китте, минең күҙгә йоҡо инмәй, тормош, кеше яҙмышы хаҡындағы уйҙар тынғы бирмәй. Шулай уйланып ултырғанда үҙенән-үҙе шиғыр юлдары тыуҙы, уны ҡабатлай торғас, шиғыр көйгә һалынды. Үҙем менән диктофон йөрөтә инем, тиҙ генә яҙҙырып ала һалдым. Алдан уҡ кешеләрҙең ойоҡһоған күңелен ҡуҙғатырҙай, уйланырға мәжбүр итерҙәй йыр яҙырға тигән ниәт менән йөрөгәйнем. Күңелемдә тыуған был йыр тап шулай килеп сыҡты.

**Рэп стилендә ижад итеү һинең күңел саҡырыуымы, әллә йырҙарҙы ошо йүнәлештә яҙыу еңелерәкме?**

- Миңә бөтә стилдәге лә йырҙар оҡшай, үҙем дә бер нисә стилдә йырлармын, тип уйлай инем. Шулай ҙа әлеге лә баяғы яңыса эшләргә ынтылып, һәм күңелемә яҡыныраҡ тойолғанғамылыр, рэпта туҡталдым. Әле рэптан тыш, егеттәр менән поп-рок стилендә бер проект әҙерләйбеҙ.

**Еңел-елпе йырҙарҙы башҡарыусылар күбәйҙе башҡорт эстрадаһында. Бындай йырҙар йәштәрҙе еңеллеккә өйрәтмәйме икән?**

- Шуны әйтергә кәрәк, ололар нисек кенә тәнҡитләмәһен, бындай дәртле, еңел йырҙар йәштәргә оҡшай. Хәҙер бындай башҡарыусылар, ысынлап та, ямғырҙан һуң сыҡҡан бәшмәк кеүек күбәйҙе. Бер яҡтан, йәштәрҙең шулай хыялына ирешергә теләүе, маҡсатына, юғарыраҡҡа, үҙен күрһәтергә ынтылыуы маҡтауға лайыҡ. Әммә минең уйлауымса, ваҡыт үтеү менән барыбер иң-иңдәр, йәғни ысын таланттар



ғына тороп ҡаласаҡ. Халыҡты алдап булмай. Икенсе яҡтан, әгәр ошондай "еңел-елпе" йырҙар ҙа булмаһа, йәштәребеҙ рус, инглиз, башҡа телдәге сит халыҡтың йырҙарын тыңлар ине. Мәҫәлән, "Юлдаш" радиоһы кисен башлыса йәштәр ятҡан йырҙарҙы ҡуйһа, халыҡҡа күберәк файҙа эшләр ине: йәштәр урыҫ, татар радиоһына ҡарағанда, "Юлдаш"ҡа өҫтөнлөк биреренә иманым камил. Ишетеп-күреп белеүемсә, телде насар белгәндәр башҡа телдәге йырҙарға ҡарағанда, үҙебеҙҙең ошондай йырҙарҙы тыңлауҙы хуп күрә.

**Уларҙан айырмалы, һинең тамашасыларға, әйтер һүҙең, фекерең бар. Иманға саҡырып, кешелекте изгелеккә өндәгән матур йырҙар яҙырға ниндәй уйҙар этәрә һине?**

- Ҡайһы бер милләттәштәремдең үҙҙәрененең башҡорт икәнен, бөйөк халыҡтың улы, ҡыҙы икәнен онотоп, насар ғәҙәттәргә бирелеп, үҙенең телен, тарихын белмәүе борсоуға һала мине. Башҡорт булған һәр кем үҙенең һәр эшен, маҡсатын, уңыштарын үҙ халҡы яҙмышы менән бәйләргә тейеш. Һәр эште атҡарғандан һуң әҙәм балаһы үҙенә эшем менән халҡыма берәй файҙа килтерҙемме, тигән һорау бирергә бурыслы. Беҙ берҙәм, белемле, ҡыйыу булырға тейешбеҙ. Берҙәм булыу тигәндән, мәҫәлән, Фәнзил Әхмәтшин, Заһир Ҡотлосурин, Фәүзил Маликов кеүек милләтемдең рухлы егеттәре булмаһа, бер үҙем генә бөгөнгө уңыштарыма өлгәшә алыр инемме икән? Әлбиттә, ата-әсәйемдең дә был юҫыҡта ярҙамы ҙур булды.

**Һинеңсә, бөгөнгө "башҡорт шоу-бизнесы" ниндәй кимәлдә?**

- Бөгөнгө "башҡорт шоу-бизнесы" имгәкләп йөрөгән, оҙаҡламай тәпәй баҫасаҡ бәпәй генә әле.

**Шулай итеп...**

**Заһит Ҡунафин - М.С. Баш кеүек һәләтле, рухлы, маҡсатлы, йәштәребеҙ, башҡорт эстрадаһындағы өмөтлө йырсыларыбыҙ үҫеп килеүе күңелде йылыта. Тап улар үҫергә һәм сәхнә күгендә үҙ йондоҙон ҡабыҙырға лайыҡлы.**

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Шаярта белһәң дә...

## шаяртырға ашыҡма

Дуҫтар килә тора, китә тора, ә дошмандар туплана.

**(Джоунз девизы).**

Мыжыҡ - ул "Хәлдәр нисек?" тигәнгә ҡаршы ысынлап та хәлен ентекләп һөйләй башлаусы кеше.

**(Виктория Токарева).**

Яҡшы шаяртыуҙы баһаларға өйрән, ләкин үҙең шаяртыуҙан тыйыл: башҡаларҙың шаяртыуҙы аңлау-аңламауын белмәйенсә, уңайһыҙ хәлгә ҡалма.

Асыуыңды тышҡа сығарыр алдынан унға хәтле һана, шул саҡта асыуың ахмаҡлыҡ булып тойолор.

**(Уильям Джеймс).**

Кешене "уңышһыҙ" тип атаһаң, ул үҙен ысынлап та уңышһыҙ кеүек тота башлаясаҡ.

**( Т.Питерс).**

Бер ваҡытта ла ахмаҡ менән бәхәсләшмә - кешеләр һеҙҙең араланы айырманы шәйләмәҫкә мөмкин.

**(Рейберн ҡағиҙәһе).**

Ғорур булыу - ул һиңә тейешленең аҙ ғынаһын алыу.

**(Джебран Хәлил).**

Алтын холоҡло булыу өсөн тимер түҙемлек кәрәк.

**(Владилен Прудовский).**

Дәүләт эшмәкәренең сәйәсмәндән айырмаһы шунда: сәйәсмән - киләһе һайлауҙарға, дәүләт эшмәкәре киләһе быуындарға иҫәп тота.

**(Уинстон Черчилль).**

Үткәндәргә пистолеттан атма, юҡһа, киләсәк һиңә пушканан атыр.

**(Майкл Маркс).**

Юғарыға үрләр алдынан үҙеңә алмашсы әҙерләү тураһында уйла.

**(Фредирик Тейлор).**

Кешегә хаталаныуҙар хас, әммә хаталарҙы башҡаларға япһарыу - тағы ла хасыраҡ.

**(Якоба законы).**

Һәләтлеләргә көнләшәләр, талантлыларға зыян итәләр, генийҙарҙан үс алалар.

**(Н. Паганини).**

Тормошта булған бар яҡшы нәмә - йә закондан тыш, йә әхлаҡһеҙ, йә һимереүгә килтерә.

**(Пардо законы).**

Хеҙмәткәрҙе етәксе түгел, ә шарттар эшләргә мәжбүр итергә тейеш.

**(Рюити Хасимото).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер саҡ Аркадий Гайдарҙан хәрби дуҫтары былай тип һорай икән: "Һеҙ үлемгә нисек ҡарайһығыҙ?" "Кире ҡарайым", - тип яуап биргән Гайдар. "Ни өсөн улай булғас пуля аҫтына аяуһыҙ ташланаһығыҙ?". "Йәшәү өсөн", тип яуап биргән Гайдар".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, 2**53-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 2**53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6029
Заказ 742